ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Апрель








ЯҘЫЛ ДА, БҮЛӘК ОТ!

# ДУҪЛЫҠ ДАУАМ ИТҺЕН!

**Күрсәк – пүстәк, иң мөһиме -**
**Картуф уңды баҡсала.**
**“Аманат”ка яҙылдыҡ беҙ**
**Шуны һатҡан аҡсаға,**

тип йырлап-бейеп ҡаршы алдылар беҙҙе Бөрйән районының Яңы Усман ауылында. Был ауыл мәктәбендә балалары уҡыған һәр ғаиләнең “Аманат”ты алдырыуы тураһында беҙ хәбәр иткәйнек инде.

Бөтөн мәктәптең балалар-үсмерҙәр журналын уҡыуы – башҡаларға ҙур өлгө. Улар “Аманат” менән бик әүҙем хеҙмәттәшлек тә итә: журналда әленән-әле улар яҙған мәҡәләләр сығып тора, беҙҙең конкурстарҙа ла еңеүселәр бар. Ҡырыҫ тәбиғәтле Урал тауҙары ҡуйынында ятҡан алсаҡ йөҙлө ауылда беҙҙе:” Йыл һайын берәй конкурсығыҙҙа еңеп, гел һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырып торорбоҙ!” – тип оҙатып ҡалдылар.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**
**Илһам ӘХМӘҘУЛЛИН фотолары.**



“Усман мәктәбендә хәҙер “Аманат” ваҡыты”, – ти директор Илдар Шакир улы Ишморатов.



## Әйткәндәй, “Аманат” журналына 2010 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу дауам итә!

Сыуаҡ яҙҙарҙы, мең мажаралы хозур йәйҙәрҙе көтөү мәшәкәттәренә сумып китеп, сираттағы подписканы онотоп ҡуйһағыҙ, берәй ҡасан яратҡан журналығыҙҙың ҡапыл килмәй башлауын аңғарыуығыҙ ихтимал. Һуң булып ҡуймаһын өсөн, “Аманат”ка яҙылырға онотма, дуҫым! Ошо теләкте дуҫтарыңа ла аманат итеп еткер. Беҙгә яҙылыу хаҡы 133 һум 26 тин.

## ЯҘЫЛ ДА, БҮЛӘК ОТ!




# КЕҪӘ ТЕЛЕФОНЫ – ИЛНАРҘА!



“Аманат” журналының “Яҙыл да, бүләк от!” конкурсында еңеп, кеҫә телефонына эйә булыу бәхете быйыл Әбйәлил районы Михайловка урта мәктәбенең 6-сы синыфы уҡыусыһы Илнар Хөснийәровҡа йылмайҙы.

Илнар журналды йыл һайын алдырып бара, “Аманат” коллекцияһы”, “Оҫтахана” рубрикаларын һәм спорт темаһына ҡағылышлы материалдарҙы яратып уҡый. Мәктәптә лә алдынғы уҡыусы һанала. Математика, география, йәмғиәтте өйрәнеү, физкультура дәрестәрен айырыуса көтөп ала. Футбол уйнарға ярата, буш ваҡыты булһа, шунда уҡ дуҫтары менән туп тибергә ашыға.

Әсәһе Сәлиха Рафиҡ ҡыҙына ла йорт эштәрендә теләп ярҙамлаша. Утын ярыу, һыу ташыу, мал-тыуар ҡарау ҙа Илнарҙың өҫтөндә. Илнар киләсәктә лә журнал иғлан иткән конкурстарҙан ситтә ҡалмаҫ, тип ышанабыҙ, уҡыуында уңыштар, яңы еңеүҙәр теләйбеҙ!

# КЕМ АЛЫҠ? БЕҘ АЛЫҠ!







Ғинуар айында, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының 90 йыллығына арнап, “Кем алыҡ?” бәйгеһе иғлан иткәйнек. Уның шарттарына ярашлы, театр һөйөүсе уҡыусылар журнал тышлығында сыҡҡан “академиктарҙың” ҙур фотоһынан мөмкин тиклем күберәк актерҙарҙы танып, шул турала беҙгә яҙып ебәрергә тейеш ине. Һөҙөмтәлә, түбәндәге уҡыусыларыбыҙ еңеүсе тип табылды:

**Зилә Яҫыбаева, Баймаҡ районының Түбәнге Таһир ауылынан;**
**Сөмбөл Искужина, Мәләүез ҡалаһынан;**
**Әлфиә Йәйләүева, Ейәнсура районының Башҡорт Үргене ауылынан;**
**Динар Тимершәйехов, Илеш районының Ишҡар ауылынан;**
**Зимфира Ғибадуллина, Ишембай районының Биксән ауылынан;**
**Гүзәл Ғафарова, Ғафури районының Һабай ауылынан;**
**Рәзилә Тимербаева, Бөрйән районының Ғәҙелгәрәй ауылынан;**
**Лилиә Солтангәрәева, Көйөргәҙе районының Таймаҫ ауылынан.**

Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ һәм уларға артабан да “Аманат”тан айырылмауҙарын теләйбеҙ.




## Яҙым килә

Бына тағы беҙҙең илгә
Яҙым килә ашҡынып.
Гөрләүектәр йырлап аға,
Ҡоштар ҡайта һағынып.

Яҙ килгәненә ҡыуанып,
Сыр-сыу килә турғайҙар.
Сыйырсыҡтар моңланып,
Яҙҙы данлап йырлайҙыр.

Мөғжизәләй яҙ миҙгеле –
Тып-тып тама тамсылар,
Тирә-яҡты йырға күмеп,
Ашҡынып аға һыуҙар!

Һыуҙар ашҡынып аҡһа ла,
Ғүмер ҡабалан үтмәһен,
Яҙға ҡарап һоҡланыуҙан
Яҙмыш мәхрүм итмәһен.

**Гөлкәй ШИҺАПОВА,**
**Белорет районының**
**Шығай мәктәбе уҡыусыһы.**

## Яҙғы урам

Урамда яҙ, ҡояш көлә,
Ҡыуана бала-саға.
Бер-береһенән уҙышып,
Ҡыйыҡтан тамсы тама.

Күңелле шул яҙ көнөндә,
Бар тирә-як йәнләнә.
Ҡоштар ҡайтып һайраһалар,
Урман шундай йәмләнә!

Йылғаларҙа боҙҙар китә,
Яҙғы тулҡын шашына,
Яр ситенән сығып китә –
Әллә ҡайҙа ашыға...

Ағастарҙа бөрөләр ҙә
Күптән күҙҙәрен асҡан.
Яландарҙа тәүге сәскә –
Умырзаялар ҡалҡҡан...
Яҙ!

**Зилиә ӘБСӘЛӘМОВА,**
**Өфө ҡалаһының 140-сы**
**Башҡорт гимназияһы**
**уҡыусыһы.**

## Яҙ!

Яҙ килә! Яҙ килә!
Йырғанаҡтар гөрләшә.
Ямғыр яуа, иҫә ел!
Бар тәбиғәт серләшә.

Йылы яҡтан ҡоштар ҡайта,
Япраҡ яра аҡ ҡайын.
Сәскә ата умырзая.
Яҙҙы көтәм йыл һайын.

**Лилиә ӘҮХӘҘИЕВА,**
**Өфө ҡалаһының 17-се**
**мәктәбе уҡыусыһы.**

## Сабата

Бесәйем бар – “Сабата”.
Барыһы ла шаҡ ҡата:
Көн дә ул сысҡан тота,
Бик уйнарға ярата.

Йыуына иртүк Сабата,
Таҙа йөрөргә итә.
Ҡулдарын еүешләтә лә,
Ҡолағын ҡат-ҡат һөртә.

Ярата йомғаҡ һүтергә,
Мейестә көлгә бата.
Сабатала йоҡлап йөрөп,
Булып китте Сабата!

**Диана МӘЖИТОВА,**
**Бәләбәй Башҡорт**
**гимназия-интернаты**
**уҡыусыһы.**

## Яҙ килеүе

Һалҡын ҡыш үткәс,
Матур яҙ килә.
Һыуыҡтар бөткәс,
Ҡояш күренә.

Көндәр оҙая,
Төндәр ҡыҫҡара,
Бөтә ағастар
Бөрөһөн яра..

Һайрайҙар ҡоштар,
Балалар уйнай.
Ҡунаҡҡа ҡайта
Март, апрель һәм май!

**Лилиә ӘХМӘТЙӘНОВА,**
**Өфө ҡалаһының Фатима**
**Мостафина исемендәге**
**20-се башҡорт**
**гимназияһы**
**уҡыусыһы.**

## Изге бурыс

Байрам менән котланым
Ғәзиз олатайымды.
Сөнки ул да касандыр
Һаклаған беҙҙең илде.

Һәр ир-егеттең бурысы –
Илдең батыры булыу,
Тыуған ерҙе һаклау һәм
Халҡым, тип яуға инеү.

Олатайым ошоларҙың
Барыһын да үтәгән.
Һәм шуға ла башын эймәй
Бөгөнгәсә йәшәгән.

Атайҙар байрамы менән
Барыһын тәбрикләнем.
Һәм тик шуны теләнем –
Тыныс булһын илкәйем!

**Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА,**
**Белорет районының**
**Мәхмүт мәктәбе**
**уҡыусыһы.**

## Картатайым – ветеран

Байрам бөгөн, байрам бөгөн,
Күңелле бар тирә-яҡ.
Еңеү көнөнә арнап
Элеп ҡуйҙыҡ беҙ байраҡ.

Йортобоҙҙоң түрҙәрендә
Ҡартатайым – ҡаһарман!
Тик күңеле уның бөгөн
Моң-һағыштарға тулған.

...Ҡырҡ беренсе йыл йәйендә
Һуғыш башлай фашистар.
Уларҙың был ҡырын эшен
Ен-шайтан ғына маҡтар.

Мең дүрт йөҙ ҙә ун һигеҙ көн
Барған был ҡанлы алыш.
Беҙҙекеләр еңеп сыкты,
Уларға – дан, ҡаҙаныш!..

Шуларҙы бөгөн хәтерләп,
Моңайҙы картатайым.
Илебеҙҙең тыныслығын,
Үҫкәс, мин дә һаклайым.

**Рәил ДӘҮЛӘТШИН,**
**Ейәнсура районының**
**Ғайса Акманов исемендәге**
**Байыш урта мәктәбе**
**уҡыусыһы.**



## Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәте балаларға яңы китаптар тәкдим итә:

**Әхмәт Сөләймәнов.**
**Башкорт балаларының карһүҙе.**



Балаларҙың ауыҙ-тел ижадынан өлгөләр көлдөрөк, ымһындырыҡ, көләмәс кеүек юмористик жанрҙарҙан тупланған. Әйткәндәй, был китапта шулай ук балалар ижад иткән, төрлө ваҡыттарҙа “Аманат” журналында донъя күргән әкиәттәр, улар яҙып алған риүәйәттәр һәм легендалар ҙа бар. Беҙҙең элекке авторҙарҙың күптәре был китапта үҙҙәренең ижад емештәрен таба ала.

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән иншалар йыйынтығы.**



Әҙәбиәт һөйөүселәргә тәғәйенләнгән был китапта төрлө темаларға яҙылған иншалар өлгөләре, инша яҙыу өсөн тәкдим ителгән темалар, инша яҙыу һәм уларҙы баһалау тәртиптәре, әҙәби терминдарҙың ҡыҫҡаса аңлатмалары бирелгән.

**Салауат Кәрим.**
**Күңел йылыһы.**



Балалар яҙыусыһы Салауат Кәримдең был китабына үҫмерҙәр тормошон сағылдырған “Хәйҙәр” повесы, хикәйәләре һәм шиғырҙары ингән.

**Урания Вахитова.**
**Алтын шөңгөр.**



“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе булып, тәүге ижади өлгөләрен беҙҙең журналда сығара башлаған Учалы ҡыҙы Урания әле Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика гимназия-интернатында 11-се синыфта белем ала. “Йәш тауыштар” серияһында тәүге шиғырҙар йыйынтығын тәкдим иткән ҡыҙҙың ижадында балалыҡ ихласлығы менән донъяға үҙенсәлекле ҡараш ҡушыла.

# Беҙ кем дә онотолмаһын

Беҙҙең Мораптал ауыл советынан 467 кеше һуғышҡа китеп, шуларҙың 254-е генә әйләнеп ҡайта. Бөгөн һигеҙ Бөйөк Ватан һуғышы ветераны иҫән. Ауылыбыҙҙа Ленинград блокадаһында булып, торф сығарыуҙа ҡатнашҡан дүрт әбейебеҙҙең икеһе – Мөкәрәмә Мәксүтова һәм Мәғрифә Таңатарова иҫәндәр.

Һуғыш тураһында һөйләшеү бик күңелле булмаһа ла, был хаҡта иҫкә алмау мөмкин түгел. Ветерандарыбыҙ һәр береһе балалары менән йәшәй. Колхоз, мәктәп уҡыусылары тарафынан онотолмайҙар. Өйҙәренә йөрөү, кәрәк саҡта ярҙам күрһәтеү, осрашыуҙар үткәреү ғәҙәткә ингән.

Советтар Союзы Геройы Морат Ҡужаков Иҫке Мораптал ауылынан. Уның исемен мәңгеләштереп, ауыл мәктәбендә мемориаль таҡтаташ ҡуйылды. Мәктәпкә килгән һәр бала уның ниндәй батырлыҡ күрһәтеүе һәм уға ни өсөн Герой исеме бирелгәнен белә.

Бөйөк Еңеүҙең утлы йылдары тарих төпкөлөнә инә барған һайын арабыҙҙа һуғышта ҡатнашыусылар һирәгәйә бара. 65 йыллыҡ байрамды ҡаршыларға Ҡотлоғужа Ғәлиев, Линнур Хәбибуллин бабайҙарыбыҙ ҙа өлгөрмәне. Бөгөнгә көндә Йәүҙәт Дауытов, Афзал Ишдәүләтов, Ишбулды Йәнбирҙин, Ғөбәй Нафиҡов, Мөхәмәтйән Кинйәбулатов, Петр Карпушкин, Ғәзиз Буранов, Шәйхетдин Аҙнабаев бабайҙар иҫән. Уларға һаулыҡ, матур ҡартлыҡ теләйбеҙ.

Беҙҙең мәктәптә “Файҙалы эштәр разведкаһы” үткәрелде, унда 7, 8, 9-сы синыф уҡыусылары ҡатнашты. Өйҙәр буйлап йөрөп, ”Хәтер” китабына кермәй ҡалғандарҙың исем-фамилияларын, тыуған, һуғышҡа киткән, ҡайтҡан йылдарын асыҡларға тырыштыҡ. Был эштә беҙгә мәктәп тормошо өсөн янып йәшәүсе ветеран уҡытыусылар Фирҙәүес Хәлил ҡыҙы Ғисмәтуллина менән Кәттәл Ҡаһарман улы Арғынбаевтың ярҙамы ҙур булды.

**Ильмира АЛЛАБИРҘИНА,**
**Баязит Бикбай исемендәге**
**Мораптал урта мәктәбенең**
**9-сы синыф уҡыусыһы.**
**Көйөргәҙе районы.**

# Ҡарт өләсәйемдең яҡты иҫтәлегенә

Бөйөк Еңеүгә минең ғаиләм һалған өлөш тә бик ҙур. Ҡарт олатайҙарым һуғыш яландарында ятып ҡалған, өләсөйҙәрем тылда ауырлыҡтар күргән. Олатайым һәм өләсәйем бер ҡасан да атайҙарын күрмәй, “атай” һүҙен әйтә алмай үҫкәндәр.

Ҡарт өләсәйем Хәлитова Рәхимә Саҙретдин ҡыҙы 1906 йылда Батыр ауылында тыуа. Тырыш хеҙмәте менән көн күреүсе урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тәрбиәләнә. Ул йәштән үк уҡырға зирәк, отҡор була, иҫкесә уҡый, яҙа белә, ә инде һуғыштан һуң яңыса уҡырға-яҙырға ла өйрәнә. Үҫеп буй еткәс, Аҡсурин Ғималетдин Фәхретдин улына кейәүгә сыға. Йәштәр дәртләнешеп, гөрләтеп йәшәй башлай. Бер-бер артлы 7 балалары тыуа. Киләсәккә ҙур өметтәр бағлап йәшәп ятҡанда, һуғыш башлана.

Ҡарт олатайым 1941 йылдың 22 июлендә һуғышҡа китә. Минең өләсәйем Тәнзилә атаһы һуғышҡа киткәс тыуа. 1942 йылдың декабрендә аталарының хәбәрһеҙ юғалыуы хаҡында хат килә. Шулай итеп, минең өләсәйем атаһын бөтөнләй күрмәй ҡала.

1942 йылдың йәйендә ауылда тиф ауырыуынан халыҡ ныҡ ҡырыла. Көн һайын 3 – 4 кеше яҡты донъя менән хушлаша. Был афәт ҡарт өләсәйемдең йортон да урап үтмәй, 2 йәшлек Зәйтүнәне лә алып китә.

Ҡарт өләсәйем балаларын астан үлтермәҫ өсөн серек картуфтан ҡоймаҡ, сөгөлдөр, ҡабаҡ япраҡтарынан, балтырғандан аш бешереп ашата. Кесерткән иң тәмле ризыҡҡа әйләнә.

Ҡарт өләсәйем ҡайғыларға бирешмәй, рухы һынмай. Оло ҡайғынан һуң да йөрәге тупаҫланмай, ул һәр саҡ кешеләргә шәфҡәтле, ярҙамсыл булып ҡала. Сирләп киткән, бәләгә тарыған ауылдаштары уға һәр саҡ ярҙам һорап килгәндәр. Ҡайһыһын дауалап, ҡайһыһын йылы һүҙе менән йыуатып, ҡайһыһын өшкөрөп ҡайтарған.

Ҡарт өләсәйем бөгөн беҙҙең арала юҡ инде. 24 йыл элек ҡаты ауырыуҙан донъя ҡуйған. Әммә уның һәр бер һөйләгән һүҙе әле булһа әсәйемдең хәтерендә.

**Гөлназ ХӘЛИТОВА.**
**Федоровка районы, Батыр ауылы.**

# Миллиондарҙың береһе

Ҡартатайым Миңлебай Ибраһим улы Ғәлиев – Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир. Уның яу йылдары хаҡында яныП-көйөп һөйләгән хәтирәләрен һис кенә лә онота алмайым мин. Ул 17 генә йәшендә ҡулына ҡорал ала. Кесе командирҙар мәктәбен үтеп, 1943 йылдың аҙағында дошман менән алышҡа инә.

1945 йылда бер мәл уның ротаһы көслө ут аҫтында ҡала. Бик күптәр һәләк була ул алышта. Бар яуаплылыҡ картатайым өҫтөнә төшә. Ротаһын күтәреп, алға ынтылған арала дошман пуляһы уның яңағын умырып үтә. Ауыҙынан ҡан менән бергә тештәре ҡойолоп торғанда ла ротаһын яңынан яуға әйҙәй.

Артабан уны госпиталгә оҙаталар. Оҙаҡ аңына килә алмаған яугирҙы, үлгәнгә һанап, моргҡа алып баралар. Алып барыусылар араһында Миңлеғәле исемле дуҫы ла була. Ҡартатайымдың туғандарына уның үлеме хаҡында яҙып һала ул.

Тик егет, яуыз үлемде еңеп, 1947 йылда 21 йәшендә күкрәге тулы орден-миҙалдар менән ҡултыҡ таяҡтарында ҡайтып төшә. Санитар ҡыҙ оҙатып килә үҙен.

Һуғыштан һуң егерме йыл ваҡыт үткәс картатайым менән өләсәйем район үҙәгенә баҙарға килә. Шунда өләсәйем үҙҙәренең артынан ҡалмай эйәреп йөрөгән бераүгә иғтибар итә. “Балаларға тип алған нәмәләрҙе урларға ниәтләгән берәй бурҙыр”, – тип хафалана ул. Ә ҡартатай артына әйләнеп ҡарай ҙа: “Миңлеғәли, беҙҙең эргәлә урын бар, әйҙә ултыр”, – ти. Миңлеғәли тигәненең ҡулынан батмусы төшөп китә яҙа: ”һин үлгәйнең бит, Миңлебай, һине үҙ ҡулдарым менән мәйеттәр яткан бүлмәгә индергәйнем,” – тип һөйләнә. Был икеһе өсөн дә тетрәндергес хәл була.

Бөйөк Ватан һуғышында алған яраларына бирешмәйенсә, көслө рухлы булды ҡартатайым. Өләсәйем менән 40 йыл бергә йәшәп, ете бала үҫтерҙеләр.

**Рәғиҙә ҒӘЛИЕВА.**
**Йылайыр районының**
**һабыр ауылы.**

# Һуғыш яралары онотолмай

Минең олатайым Ғафури районының Сәйетбаба ауылында 1941 йылдың 5 июлендә донъяға килгән. Сәлимовтар ғаиләһендә ете баланың иң олоһо булған. Үҫә килә ул ҡурай уйнай башлаған, туғандарын да ҡурай уйнау серҙәренә өйрәткән.

Олатайым 1936 – 1938 йылдарҙа Ҡыҙыл Әрме сафында хеҙмәт иткән. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, ул 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының Таһир Күсимов командалыҡ иткән 175-се полкына эләгә. Уның хаҡында яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев үҙенең “Генерал Кусимов” тигән китабында әйтеп үтә. Ул һуғышта башҡа яугирҙар кеүек батыр һәм ҡыйыу һуғыша, разведкаларға йөрөй. 1943 йылдың көҙөндә яраланып, госпиталгә эләгә. Унда дауаланған саҡта һыҙланыуҙарын баҫыр өсөн ҡулына ҡурайын ала...

Олатайым Мозырь, Холм, Люблин, Варшава ҡалаларын һәм бик күп ауылдарҙы немец фашистарынан азат итеүҙә ҡатнаша. Ул 1942 йылдың майынан 1945 йылдың 9 майына тиклем Бөйөк Ватан һуғышында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы составында һуғыш яланын үтә.

Һуғыштан иҫән-һау йөрөп ҡайтҡас, олатайым бар дәрт-дарманын, көсөн тыуған колхозына бирә, башҡаларға үрнәк булып донъя көтә. Көндөҙ колхоз эшенә йөрөһә, кистәрен ауыл клубы янында эшләп килгән үҙешмәкәр түңәрәккә йөрөй. Ауылдың, районның мәҙәни тормошонда әүҙем ҡатнаша.

Яҙыусы, шағирә Гөлнур Яҡупова, олатайымдың ҡурай моңона һоҡланып, батырлығына ғорурланып “Ҡурайсы” тигән шиғырын уға арнай.

Тик һуғыш яралары эҙһеҙ үтмәй. 1989 йылдың 19 сентябрендә ҡурайсы-яугир олатайым Йәнмырҙа Сәйфулла улы Сәлимов яҡты донъя менән мәңгелеккә хушлаша.

Беҙ олатайымдың һәм уның һымаҡ тыныс тормош яулау өсөн ғүмерҙәрен йәлләмәгән ветерандарҙы онотмайбыҙ һәм онотмаясаҡбыҙ ҙа!

**Илүзә РӘХМӘТУЛЛИНА,**
**11-се синыф уҡыусыһы.**
**Стәрлетамаҡ районының**
**Васильевка ауылы.**

# ДОШМАНДЫ ЕҢГӘН ҠУРАЙ

**Баймаҡ ҡалаһының 1-се мәктәбенә осрашыуға барғанда, унда ойошторолған республикалағы берҙән-бер Ҡурай музейына һоҡланырға тура килгәйне. Һәм шунда уҡ Бөйөк Ватан һуғышында йөрөп ҡайтҡан еҙ ҡурайҙы күреп, уның бында килеп эләгеү тарихы менән ҡыҙыҡһындыҡ: кем ҡулдарында уйнаған ул, ҡайһы ерҙәрҙә башҡорт моңдарын яңғыратҡан? Байтаҡ ваҡыт үтеүгә, Баймаҡтан хат килеп төштө: музей хеҙмәткәрҙәре, оҙаҡ ҡына эҙләнгәндән һуң, ҡомартҡы ҡурайҙың хужаһы кем булғанын асыҡлай алған! Тырыш эҙәрмәндәргә оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.**

**Бына шулай, нисәмә йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, тарих ҡабаттан яңыра тора, ауаздарын яңынан-яңы быуындарға еткерә. Был мәҡәлә лә Ҡурай музейында лайыҡлы урын табыр тип ышанабыҙ.**



Баймаҡ районының Ярат ауылы тимерсеһе, ҡурайсы Ғиниәтулла Фазлетдин улы Дәүләтбаев 1907 йылда тыуған. Фазлетдиндың бер улы Ғәлиәхмәт, колхоздың күк айғырын менеп, Башҡорт кавалерия дивизияһына китә һәм яуҙа батырҙарса һәләк була. Икенсе улы Нуретдин да яу яландарында хәбәрһеҙ юғала. Ә Ғиниәтулла, ауылда берҙән-бер тимерсе булараҡ, һуғыштан ҡалдырыла килә.

1942 йылдың мартында уға ла сират етә. Ул артиллерия бригадаһына эләгә. Ғиниәтулла Беренсе Украина фронты ғәскәрҙәре сафында Рәсәйҙең бик күп ҡалаларын, Украина, Польша ерҙәрен азат итеүҙә ҡатнашҡан. Һуғыш туҡтаған арала ул ҡурайын ҡулына алып, иптәштәренең рухын күтәргән.




“Висла – Одер” операцияһын үткәргән ваҡытта артиллерия бригадаһы ҡыҫҡа ваҡытҡа ялға туҡтай. Ғиниәтулла ҡурайын алып, “Урал”ды һыҙҙырып ебәрә. Барлыҡ һалдаттар ҙа, тын ҡалып, моңға сорнала. Шул ваҡыт ҡайҙандыр һыбай бер полковник килеп сыға ла, ҡурайсыға пистолет тоҫҡап: ”Унда кешеләр ҡан ҡоя, ә һеҙ күңел асаһығыҙ!” – тип ҡысҡыра. Һалдаттар ырғып тороп, автоматтарын полковникка төҙәп: ”Әгәр һеҙ уға тейһәгеҙ, беҙ һеҙгә атасаҡбыҙ!” – тип иҫкәртәләр. Полковник атын ҡырҡа бора ла, командир янына барып, ниҙер һөйләшкәс, ары сабып китергә мәжбүр була.

Украинаны азат итеү һуғыштарында Ғиниәтулла Дәүләтбаев ауыр яраланған ауылдашы Мостафа Азаматовты арҡаһына йөкмәп, санчаҫка алып барып еткерә. Үлемдән ҡурсалаған ауылдашы һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайта.

Ғиниәтулла Фазлетдин улы һуғышта ҡайҙа, ниндәй генә шарттарҙа йөрөһә лә, яу ҡоралы менән моң ҡоралын да ташламай. Германияның Дрезден ҡалаһында үҙе эшләгән еҙ ҡурайында башҡорт халыҡ көйҙәрен уйнай. Уның ҡурай моңона төрлө милләт кешеләре ғашиҡ була. Моғайын, ул күптәрҙә тыныс тормошҡа, уның хаҡына еңеүгә ышаныс уятҡандыр.

Һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас, ҡурайсы фронтовик йәнә яратҡан тимер эшенә тотона. Ғиниәтулла Дәүләтбаевтың ҙур ғаиләһендә ике ҡатындан 12 малай һәм өс ҡыҙ үҫкән. Уның шөғөлөн балалары дауам итә, араларында һунарсылар ҙа, ҡурайсылар ҙа бар.

Бөгөн Ғиниәтулла Фазлетдин улы яҡты донъяла юҡ инде. Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, ҡурайсы Дәүләтбаевты туғандары, балалары һәм ауылдаштары онотмай, ҡурайы моңо яҡты иҫтәлек булып йөрәктәрҙә һаҡлана. Уның яуҙан әйләнеп ҡайтҡан еҙ ҡурайы – беҙҙең музей өсөн бик ҡиммәтле ҡомартҡы ул.

**Гөлнара ФӘХРЕТДИНОВА,**
**Баймаҡ ҡалаһының**
**1-се урта мәктәбе уҡыусыһы.**

**ҺҮРӘТТӘ: 1945 йыл, Ғиниәтулла Дәүләтбаев Германияның Дрезден ҡалаһында, уның ҡулында әле Баймаҡ ҡалаһының 1-се мәктәбендәге Ҡурай музейында һаҡланған еҙ ҡурайы.**

# ЯУГИР – ПУЛЕМЕТСЫ

Сәлих Мөхәмәтхажи улы Хәсәнов 1925 йылдың декабрендә Ейәнсура районының Вәлишә ауылында тыуған.

Ул ваҡыт илебеҙ өсөн ауыр һәм аслыҡ йылдары була. Сәлихкә өс кенә йәш тулғанда атаһы үлеп китә. Әсәһе биш балалы иргә тормошҡа сыға. Шулай итеп, үҙенең ағаһынан башҡа, уның үгәй ағайҙары һәм һеңлеләре барлыҡҡа килә. Сәлих дүрт йыл ғына уҡып ҡала, аҙаҡ колхозда эшләй башлай. Күпме генә тырышһалар ҙа, туйғансы ашау ҙа, йүнле кейенеү ҙә тәтемәй ул заман балаларына. “Күп балалар аслыҡтан үлде”, – тип иҫкә ала ул осорҙо Сәлих Мөхәмәтхажи улы.

Ил өҫтөндә ҡот осҡос “Һуғыш” һүҙе яңғырағанда, Сәлихкә 17 йәш була. Уны үҙенең тыуған көнөндә һуғышҡа алып китәләр. Ырымбур янындағы Туҡ (Тоцк) ҡалаһында өс ай һуғыш һөнәре өйрәнгәс, 2-се Белорус фронтына барып эләгә Сәлих.

– Белемең? – тип һорай рота командиры.

– Дүрт класс, иптәш капитан.

– Пулеметсы булаһың, расчет командиры.

– Ә ниндәй пулемет?

– Беҙҙә “Максим”. Элек күргәнең бар инеме?

– Эйе, мин запас полкта унан бер тапҡыр атып ҡараным.

“Немецтар миномет һәм туптарҙан ут яуҙырып, һөжүмгә күтәрелделәр. Минең һул аяғыма һәм ҡулыма мина ярсығы тейҙе. Тик мин һуғыш яланын ташламаным. Санинструктор ҡыҙ шыуышып килеп, яраларымды бәйләне, шул саҡ үҙе лә яраланды. Миңә лә уның яраһын бәйләргә тура килде. Пулеметым менән ҙур таш артында ята инем. Башымды ҡалҡытып ҡараһам – немецтар 200 метрлап ҡына арауыҡта. Өс таҫма патронды атып бөтөрҙөм, һөжүмдәре тонсоҡто. Ул ваҡытта беҙҙең дә бик күп һалдаттар үлгән, командир ҙа һәләк булған”, – тип хәтерләй ветеран яугир.

1944 йылда Сәлих бабай, Днепрҙы сыҡҡан саҡта ҡулын юғалтып, ауылға ҡайта. Оҙаҡ йылдар колхозда эшләй, балалар үҫтерә. Яңыраҡ ул 84 йәшен билдәләне.

Һыңар ҡуллы булһа ла, олатай һис кенә лә тик тормай. Уның йорт-ҡураһы һәр саҡ ялтлап тора, ауылға йәм биреп ултырған баҡсаһында бер генә сүп тә күрмәҫһең. Уҡыусы балалар ҙа ветеранды иғтибарһыҙ ҡалдырмай, килеп ярҙам итеп торалар. Йөҙгәсә йәшә, Сәлих олатай!



**Гөлсибәр ИСЛАМҒОЛОВА.**
**Ейәнсура районының Вәлишә ауылы.**

# Ҡатайҙар беҙ...

Мин Ҡатай ырыуынан Хисбуллиндар нәҫелен дауам итеүсемен. Балаҡатай районының Монас ауылында йәшәйем, Ләүәл урта мәктәбенең 7-се синыфында тик дүртлебишле билдәләренә генә уҡыйым.

Беҙҙең Монас ауылы Ыйыҡ йылғаһы буйында, Урал тауҙары ҡуйынында ултыра. Ауылымдың тынғыһыҙ, эшсән халҡы ҡырмыҫҡа шикелле һәр ваҡыт эш менән мәшғүл. Бер-береһе менән ярышып, сәмләнеп донъя көтә улар. Мин ғорур, сәмсел ауылдаштарыма ҡарап һоҡланам һәм уларҙан үрнәк алырға тырышам.

Ошо бәләкәй генә ауылдан республикаға билдәле шәхестәр ҙә сыҡҡан: Башҡортостан Республикаһының дәүләт гербының авторы Фазлетдин Ислахов, Ҡөрьәнде башҡортсаға тәржемә итеүсе ғалим Фәнил Байышев ағайҙар... Улар ҙа бит минең һымаҡ ошо ауылда тәпәй баҫҡан, хозур тәбиғәткә һоҡланып үҫкән, оло юлға сыҡҡан.




Беҙ олатайым менән ун дүрт быуынға тиклем үҙебеҙҙең нәҫелдең шәжәрәһен төҙөнөк. Олатайыма оҙаҡламай 80 йәш тула. Шуға ҡарамаҫтан, ул күп уҡый, яҙа, миңә үткәндәр тураһында һөйләй. Шәжәрәне өйрәнгәндән һуң, иң өлкән олатайыбыҙҙың 1817 йылғы икәнен белдем, уның тыуыуына быйыл 193 йыл була. Ә иң бәләкәй туғаныма әле бер генә йәш. Шулай итеп, беҙ Хисбуллиндар нәҫеленең шәжәрәһе тармаҡлана ғына бара, Аллаға шөкөр!

**Ырыуым – Ҡатай,**

**Һыуым – Ыйыҡ,**

**Ағасым – муйыл,**

**Ҡошом – ыласын,**

**Милләтем – башҡорт!**

**Үҙем – Рәлиф ХИСБУЛЛИН.**

# БӨРЙӘН ЕРЕ



Баймаҡ районының Беренсе Эткол (Ямаш) ауылының быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан бай тарихы бар.

VI-VII быуаттарҙа Урта Азияла, Мөрғәбә үҙәне буйында, Бохара оазисындағы Башҡурт тауҙары буйында күсмә тормошта төрки ҡәбилә йәшәгән. Уларҙы бөрйәндәр тип йөрөткәндәр. Был халыҡ бик яугир була.

Артабан Монаш, Ямаш, Янһары, Байһары тип аталған түбәләрҙән торған Бөрйән ҡәбиләһе Уралға килеп сыға һәм ошонда урынлаша. Ағиҙел йылғаһының үрге яғында ҡуйы урманға күмелгән бейек тауҙар араһындағы ер мал көтөүгә бик уңайһыҙ булып сыға. Мал-тыуарға уңайлы йәйләүҙәр эҙләп, улар Һаҡмар йылғаһы буйына килеп етә. Яҙ көндәре малдарын Ағиҙел буйҙарынан Урал тауы аша Һаҡмар буйлатып түбән ҡыуалар. Йәй үткәс, көҙгө һыуыҡтар етмәҫ борон, мал-тыуарҙары менән кире ҡайтып китәләр.

Йылдарҙың береһендә Һаҡмарҙың ҡушылдығы, хәҙерге Ҡышлауар йылғаһына килеп етеп, йәйҙе шунда үткәрәләр. Көҙ ҡайтырға йыйынһалар, бер йылҡы малы ауырыу булып сыға. Был барыбер Урал тауы аша сыға алмаҫ тип, уны йәйләүҙә ҡалдырып китәләр. Икенсе яҙ ошо ук ергә килгәс, улар үҙҙәре ҡалдырып киткән ауырыу атты күреп, аптырап ҡалалар. Етмәһә, ул бик таҙа һәм көр булып сыға. Ат бер тау буйында тибенлектә йөрөгән, эргәләге ҙур йылғаға төшөп һыу эскән, ҡыш көндәре ул туңғас, һаҙлыҡ эсендәге шишмәгә килеп һыуһынын ҡандырған. Шул ваҡыттан алып тибенлектә йөрөгән тауҙың исеме – Типкес, ҙур йылғаның исеме Ҡышлауар, ағаслыҡ араһындағы шишмәнең исеме Атйетәр булып ҡала.

Был ҡалдырып киткән ауырыу ат имен-һау ҡышлап сыҡҡас, ошо төбәктә малды уңышлы ҡышлатып була икән, тигән фекергә киләләр. Шул ваҡыттан алып ошо урында ҡышлауға ҡалалар: тәүҙә бәләкәй генә утар барлыҡҡа килә һәм тиҙ арала ҙур ауылға әйләнә. Шулай итеп, Ямаш ауылы килеп сыға. Ямаш Бөрйән ҡәбиләһенең ырыу башлығы була, бәлки, шуның өсөн дә уның исемен биргәндәрҙер. Ә инде XVII быуатта уны Беренсе Эткол тип йөрөтә башлайҙар.

Күреүегеҙсә, тарихы менән дә, тәбиғәте менән дә дан тота Беренсе Эткол ауылы. Көр күңелле халҡы донъя рәхәтлеген, ҡәҙерен белеп, тыуған ер йәменә һоҡлана-һоҡлана гөрләшеп йәшәй. Ләкин бәғзе берәүҙәр генә тәбиғәтте үҙ итмәй, ахыры, яратмайҙыр: ағастарын ҡырҡа, йылғаларға сүп-сар ырғыта, тәбиғәтте ҡәҙерләй белмәй. Ә бит беҙҙең ата-бабаларыбыҙ яуыз дошмандарҙан һаҡлап, йылы ҡосағынан күпме ҡыйыу бөркөт осорған. Баш эймәгән ғорур халҡым, теҙ сүгеп йәшәмәгән һәм тыуған ерен ҡәҙерләгән. Сал быуаттар аша беҙгә мираҫ булып ҡалған ерем, моғайын, көрһенәләр.

Кеше менән тәбиғәт бер бөтөн булып йәшәһә, әйләнә-тирәбеҙ тағы ла йәмлерәк булып, Ямаш ауылының матурлығы менән тағы ла күпме быуындар һоҡланыр ине.

**Зөбәржәт СӨЛӘЙМӘНОВА,**
**Баймаҡ районы**
**Беренсе Эткол мәктәбенең**
**“Тыуған яҡты өйрәнеү”**
**берекмәһе ағзаһы.**

**ҺҮРӘТТӘ: Типкес тауынан Ҡышлауар үҙәне күренеше.**

## Гөлнара Мостафина




– Ул өйҙә йәшәр өсөн күп аҡса кәрәк буласаҡ бит: йылытырға, утына, һыуына, йортоңдо килеп йыйыштырып китеүселәргә..

– Уларын да теге тылсым эйәһенән һорайһың инде... Көн дә иртән тороуға яҫтығым аҫтында күп аҡса ятһын, тип һорар инем.

– Тылсым эйәһе шунда йәшәгән өсөн йәнеңде талап итһә?

– Бындай өйҙә йәшәү өсөн йәнең дә йәл түгел, бирер инем! – тип күҙен дә йоммай яуапланы Айҙар.

– Ана шул-шул. Күптәр шулай йәнен иблискә һата ла инде...

– Нисек?

– Минең бер хикәйәтемдәге егет күңелле, еңел тормош өсөн барыһын да, хатта, бына һинең кеүек, йәнен бирергә лә риза.

Айҙар олатаһының хикәйәтен тыңламайынса тыныслана алмаясаҡ, шуға күрә инәлеп уға ҡараны:

– Һөйлә инде, олатай?...

– Ярай, әҙерәк ваҡытты ҡыҫҡартырбыҙ, тыңла әкиәтемде.

Бер егет япа-яңғыҙы ғына йәшәгән. Яратҡан эше лә, дуҫ-иштәре лә, хатта һөйгән ҡыҙы ла булмаған уның. Үҙе йыш сырхаулаған. Бер көндө дауаханаға бара. Сиреңде дауалап булмай, тиҙәр уға табиптар. Күңеле төшөп, илап ҡайтып килгәндә, юлына ҡаҡса ғына, бөкрө бер ҡарт осрай. Егетте туктата.

– Юл белмәйһеңме? – ти егет ризаһыҙ ғына.

– Уныһын ғына үҙем дә табырмын, миңә һинең менән һөйләшергә кәрәк, – ти был.

– Берәй нәмә һатырға уйлаһаң, юҡ менән маташма, сит кешеләр менән аралашмайым, уларҙан бер нәмә лә алмайым.

– Юҡ, юҡ, был һөйләшеүҙең һинең өсөн бик мөһим икәнлеген белгәнгә күрә генә туктаттым үҙеңде. Үкенмәҫһең.

Егет, бер аҙ уйланып торғандан һуң, риза була.

– Мин – шайтан... – тип таныштыра үҙе менән ҡарт.

Егет, әлбиттә, ышанмай, һаһылдап көлә генә. Уға һин дә ышанмаҫ инең...

– Нимә, шайтан тигәс, күҙ алдына ҡап-ҡара, йөнтәҫ, ҡолаҡтары ҡарпайып торған, ҡойроҡло йән эйәһе килеп баҫамы? Һинең алдыңа ошо ҡиәфәтемдә лә килә ала инем, тик кешеләр, ғәҙәттә, тере шайтан күрһәләр, ҡоттары осоп, иҫтәре китеп йығылалар. Шуға күрә һүҙҙәрем тамсы ла тәьҫир итмәй. Ҡатын-ҡыҙ ҡиәфәтенә инһәң дә ен-бәрей итеп ҡабул итәләр. Бала булып килһәң дә кеше аптыратаһың. Иң яҡшыһы – бына ошо ҡарт һыны.

– Ә һин тәүҙә һүҙҙәреңдең дөрөҫлөгөн иҫбатла!

– Хәҙер, хәҙер. Шуның өсөн мин бында. Тормошҡа ашыуын бик ныҡ теләгән берәй хыялың бармы?

– Бар инде ул. Әммә хыялдың бында ни ҡыҫылышы?

– Ә һин уларҙы һанап сыҡ, өсәүһен үтәйем.

– Ҡыҙыҡ икән... Ысынлап та шайтан булһаң, моғайын, теләктәремде тормошҡа ашырған өсөн йәнемде һорайһыңдыр? Был турала китаптарҙан уҡығаным бар.

Ошо урында ҡарт-шайтан хихылдап көлөп ала. Хәйләкәр генә йылмайып, хәбәрен дауам итә.

– Юҡ, юҡ, ҡәҙерлем, ундай шарттар ҡуймайым. Иҫкелек ҡалдығы бит ул йән алыу. Заманалар хәҙер үҙгәрҙе. Әммә... Әгәр йәнеңде үҙең тәҡдим итһәң икән... мин ҡаршы түгел.

– Ә ниңә һин нәк мине һайланың әле? Ер йөҙөндә әҙәмдәр минән башҡа ла туп-тулы.

– Миңә кемде һайлаһам да барыбер, һине йәлләүҙән генә. Ғүмерең дә бик-бик аҙ ҡалған...

Шайтан-ҡарттың был һүҙҙәрен ишетеүгә егет тағы илап ебәрә. Кемдең йәп-йәшләй генә үлеп ятҡыһы килһен?

– Берәй нәмә эшлә инде, бабаҡай! Һаулығым

Аҙағы. Башы 2,3-сө һандарҙа.

Гүзәл НОҒМАНОВА һүрәттәре.

өсөн бер нәмәмде лә йәлләмәйем дә бит, бирерлек әйбер генәм юҡ шул.. – Егет ҡайғыға ҡала, ни эшләргә белмәй сәбәләнә башлай.

– Тыныслан, ҡәҙерлем. Шуның өсөн килдем бит һуң.

– Оҙон-оҙаҡ йәшәгем килә! – егет тәүге теләген әйтеп һалғанын һиҙмәй ҙә ҡала.

– Ашыҡма. Тәүҙә төрлө яҡлап уйла. Ярай, мәңгелек ғүмер бирҙем дә ти, ә һине берәй көн машина тапаһа? Зәғиф булып ҡалһаң? Ғәрип булып йәшәргә риза булыр инеңме?

– Шулай шул... – Егет уйлана. – Йә берәй яман сир менән ауырыһам... Ул ваҡытта тере мәйеткә әйләнәсәкмен бит. Инфекция таратып, кеше ҡурҡытып ҡына ятасаҡмын. Булды! Уйланым! Оҙон ғүмер һәм һаулыҡ бир һин миңә!

– Эшлектән сығып, ҡартайғансымы?

– Улай ҙа булмай шул. Ҡартайғы килмәй бит әле. Алайһа, үлемһеҙлек һәм мәңгелек йәшлек булһын.

– Шулай итеп, һине киләсәктә һаулыҡ, йәшлек һәм үлемһеҙлек көтә.

Ошонан һуң егеттең баш ауыртыуы, ауырыу-һыҙланыуҙары һыпырып алғандай юҡҡа сыға.

– Хәҙер икенсе теләгеңде әйт. Аҡса кәрәкме? Әллә дәрәжә, хакимлыҡмы?

Егет, уйлай торғас, шундай фекергә килә: көн дә иртән тороуға кеҫәһендә туп-тулы аҡса ятырға тейеш. Өсөнсө теләккә еткәс, оҙаҡ уйлана егет. Тегеһе лә кәрәк, быныһы ла – отолмау мөһим.

– Ғәҙәттә, өсөнсө теләк ҡатын-ҡыҙға бәйле була торған... – шайтан "дуҫына" йәнә ярҙамға ашыға.

Ысынлап та! Ниңә бая уҡ башына килмәгән? Ошоға тиклем ҡыҙҙар тураһында хыяллана ғына ала ине, хәҙер уны тормошҡа ашырырға мөмкинлек тыуҙы ла баһа!

– Өйләнергә теләйһеңме?

Егет ни эшләргә белмәй елкәһен тырнай:

– Ниндәй генә матур ҡыҙ булмаһын, иртәме-һуңмы, ялҡытасаҡ. Йәнә мин үлемһеҙмен дә бит әле. Ғүмеремдә күпме ҡауышыу-айырылышыуҙар көтә мине!

– Шулай итһәк?. – тип шайтан был мәсьәләнән сығыу юлын егет менән бергәләп сисә – һәр ай башында һиңә яңынан-яңы ҡыҙ киләсәк. Һәр ай һайын яңы тойғолар, яңы хистәр... Шәп бит әй?! – үҙе шырҡ-шырҡ көлөп, егеттең бөйөрөнә төртөп ала.

Ахырҙа егет тә уның менән килешә. Теләктәр теләнеп бөткәс, ҡарт-шайтан ҡуҙғала башлай:

– Йә, ярай, һау бул, осрашҡанға тиклем!

– Осрашҡанға тиклем? Беҙ тағы ла күрешәсәкбеҙме ни?

– Әлбиттә, был минең бик тә мөһим эшем!.. – Йәмһеҙ итеп шарҡылдап көлгәндән һуң, шайтан-ҡарт торған ерендә юҡҡа сыға.

Ысынлап та, шул уҡ кистә егет янына һылыу ғына бер ҡыҙ килә. Һаулыҡ һорашҡандан һуң, ғүмер буйы ошонда йәшәгәнме ни, хужалыҡ эштәренә тотоноп та китә. Шул арала егетте, йәғни ирен иркәләргә лә өлгөрә, эргәһендә өйөрөлөп-сөйөрөлә.

Иртән кеҫәһендә бер ҡап аҡса таба. Һылыу ҡыҙ менән шул көндә үк сәйәхәткә сығып китәләр. Егеттең һәр көнө байрамға әүерелә: кеҫәһендә көн дә ҡаплап аҡса өҫтәлә, янында сибәркәй – тағы нимә кәрәк?!

Бер ай үтеп китә. Бер көндө ҡыҙ тышҡа сыға ла, бүтәнсә инмәй, юҡҡа сыға. Егет көймәй, шайтан менән килешеү буйынса, икенсе ҡыҙ килергә тейеш бит. Уныһы йәшкә олораҡ була, шулай ҙа әйтеп аңлатҡыһыҙ йылылыҡ бөркөлә унан. Егеткә был бигерәк тә оҡшап ҡала. Ысынлап та, һәр ҡатын үҙенә күрә бер төрлө гүзәллеге менән айырылып тора бит!

Бер көндө яңылыҡтарҙан бала күтәргән ир кешене күрһәтәләр. "Ҡатыны өйөнән сыҡҡан һәм хәбәрһеҙ-хәтәрһеҙ юғалған", – тип фотоһын да күрһәтәләр.

– Бәй, был бит һин! – тип ҡысҡырып ебәрә егет.

– Мин шул, – тегенеһе ризалашып баш һелкә.

– Нисек була инде? Бында ни эшләп йөрөйһөң? – Егеттең аптырауының сиге булмай.

– Үҙем дә белмәйем. Ниндәйҙер көс мине һиңә этәрә, үҙем дә аңламайым... – тип һөйләй ҡатын.

Егет төнө буйы уйланып сыға. Әммә уйҙарының осо-ҡырыйы күренмәй. Шул ваҡыт, таң алдынан, теге шайтан-ҡарт пәйҙә була.



– Һин миңә ниндәй ҡатын ебәрҙең ул? – тип ҡаршы ала уны аптырауҙың сигенә еткән егет. – Уларҙы ҡайҙан табаһың? Аңлат әле.

– Ә-ә-ә... Телевизорҙа күреп ҡалдыңмы?.. Шайтан булһам да, миңә буштан ғына кеше яһау һәләте бирелмәгән.

Хи-хы-һы... – Шайтан әллә ниндәй ят ауаздар сығарып хихылдай. – Мин ҡатындарҙың йәнен үҙемә буйһондорам да, аҙаҡ уларҙы һиңә ебәрәм...

– Тәүгеһен дә шулай ебәргәйнеңме? – Егеттең шайтандың һүҙҙәренән һуң хатта йөрәге ауырта башлай.

– Әтеү һуң! Уйламаған ерҙән юғалғас, һөйгәне аҡылдан яҙҙы уның, хи-хи-хи... Ҡыҙыҡ бит, ә?!

– Һин нимә, иҫәрһеңме әллә?

– Ә мин ни эшләргә тейеш? Һиңә ай һайын яңы ҡыҙ ебәреп торорға һүҙ бирҙем бит һуң?

Егет уйға ҡала.

– Тимәк, теге... көн дә иртән кеҫәмдә хасил булған аҡсалар ҙа...

– Нәҡ шулай! – Шайтандың ҡыуаныстан күҙҙәре баҙлап янырға тотона. – Ҡайҙан барлыҡҡа килгәнен күрһәтәм хәҙер! – ти ҙә өҫтәлгә йәһәт кенә ҡағыҙ киҫәктәре йәйеп һала. Йөкмәткеһе төрлө уларҙың. Кемдеңдер сумкаһын тартып алып китәләр, ә унда иртән генә алған эш хаҡы яткан була. Бер әбейҙең әллә нисә йыл йыйған пенсияһы юғала. Ун ике йәшлек ҡыҙыҡай аҡсаһын юғалтҡас, ата-әсәһенең әрләүенән ҡурҡып, өйөнән сығып киткән... Береһенән-береһе ҡот осҡосораҡ хәбәрҙәр.

– Бына ҡайҙан килә икән миңә аҡса!.. – Йәш кешенең иҫ-аҡылы китә.

– Аҡса булдырырға ла һәләтем юҡ шул минең, әммә бына ошолай ситтән һә тигәнсе табам! – Шайтан әллә ниндәй бөйөк эш башҡарғандай ҡыуана.

– Йә, Хоҙай! – Егет ни тиергә лә, ни уйларға ла белмәй, хайран ҡала.

– Мин һиңә аҡса табырға вәғәҙә бирҙем, һүҙемдә торам! Ә уны нисек, ниндәй юлдар менән табам, унда эшең булырға тейеш түгел. Уйна, көл, рәхәтләнеп йәшә!

– Туҡта. Ә минең мәңге йәш булыуым, үлемһеҙлегем?..



– Дөрөҫ һиҙенәһең. Хатта иблис тә тәбиғәткә ҡаршы бара алмай. Шуға күрә бүтәндәр өлөшөнә инергә, уларҙан тартып алырға тура килә. Әллә еңел тип beләһеңме? Бына, мәҫәлән... – Шайтан киләһе яҙма артынан кеҫәһенә үрелә.

– Кәрәкмәй! Ишеткем дә, белгем дә килмәй!.. Ыһ!.. – Егет йөрәген тотоп һығылып төшә. – Мин бит үҙем иблискә әйләндем! Бер көн дә артыҡ йәшәгем килмәй! Беҙҙең килешеүҙе өҙәм, ал минең йәнемде!

– Ысынлап бирәһеңме ни? Мин ни... ҡуй тимәйем...

Егет шунда уҡ йән бирә. Ә күңеле булған иблис: "Аңламаҫһың был кешеләрҙе, һин уларға мәңгелек ғүмер, бөтмәҫ байлыҡ тәкдим итәһең, ә ул шуларҙан баш тарта, йәнен һиңә көсләп бирә..." – тип һөйләнә-һөйләнә артабанғы ҡорбанын эҙләп китә.

Йәнғәле бабай, хикәйәтен һөйләп бөткәс, атын шәбәйтеп ҡыуып, ниндәйҙер бер оҙон көйҙө әкрен генә һуҙып ебәрҙе. Ә Айҙар олатаһының хикәйәтен башынан үткәреп, уйға ҡалды. Шулай ҙа егет маладис, хәлдең айышына төшөнгәс, үлһә үлә, әммә енәйәтсел, гонаһлы тормоштан баш тарта. Күпме кешенең йәмле тормошон һаҡлап алып ҡала. Өләсәһенән күп тапҡырҙар: "Хәрәм аҡса, еңел тормош яҡшыға илтмәй ул. Бынау Мотяны этлеккә шайтаны ғына ҡоторталыр! Юҡһа башҡа һыймаған ҡылыҡтар эшләп ҡуймаҫ ине. Енәйәткә баҫырға ла күп ҡалмаҫ, күңеленә инеп ояланған шайтанын ҡыумаһа", – тигән һүҙҙәрҙе күп тапҡырҙар ишеткәне бар. Кешеләр урлашалар, үлтерәләр, әрләшәләр, алама һүҙҙәр һөйләйҙәр. Уларҙы шул шайтан ҡоторта булып сығамы икән? Еңел тормош көҫәү ҙә, тимәк, шуның ғына эше!

***

– Олатай! Ә нисек итеп шайтан ҡотҡоһона бирелмәҫкә?

– Бына һиңә тағы бер хикәйәт. Бер егет аҡыл эйәһенә килә.

– Хужам, – ти ул да, бына һинең кеүек, – аҡыл туплар өсөн миңә нимә эшләргә кәрәк?

Аҡыл эйәһе бер ни өндәшмәй, егет яуап ала алмайынса ҡайтып китә. Икенсе көнө лә шул уҡ һорау менән килә егет. Әммә үҙенә кәрәк яуапты ишетә алмай. Өсөнсө көнөнә, был ныҡыштан ҡотолоп булмаҫ, типме, үҙе артынан эйәрергә ҡушып, йылғаға табан атлай. Һыу эсенә инеп баҫҡас, янына егетте саҡыра. Ҡапыл егеттең елкәһенән эләктереп ала ла, башын һыуға тыға. Бисара күпме генә тыпырсынһа ла, сығырға тырышһа ла, аҡыл эйәһе ебәрмәй. Тамам хәле бөткәс кенә тартып ала уның башын һыуҙан. Тын алышы яйланып, үҙе бер аҙ тынысланғас, аҡыл эйәһе бынан: "Улым, һыу аҫтында иң ныҡ теләгәнең нимә булды?" – тип һорай. Егет уйлап та тор-



май: ” Тын алғым, һауа һулағым ғына килде” – тип яуаплай. “Шул мәлдә һауа урынына байлыҡ, хакимлыҡ, мөхәббәт, донъя рәхәтлектәре тураһында уйламаныңмы? – тип төпсөнә аҡыл эйәһе. – Бөтөнләйме?”

– Юҡ, хаким, миңә һауа ғына етмәне һәм бүтән бер нәмә тураһында ла уйламаным.

– Улай булғас, – ти аҡыл эйәһе, – аҡыллы, яҡшы кеше булыр өсөн, һинең ошо теләгең әлеге һуларға теләгән һауа кеүек үк көслө булырға тейеш. Шуны тормошҡа ашырыр өсөн тырышырға, тимәк, күп уҡырға, ҡыҙыҡһыныусан булырға бурыслыһың. Ул ваҡытта башыңа бер генә насарлыҡ та үтеп инә алмаҫ, сөнки унда яман уйҙарға урын булмаҫ, – тип яуаплаған аҡыл эйәһе.

Айҙарҙың бик-бик ныҡ аҡыллы булғыһы килде. Ул әле лә насар уҡымай, әммә дәрестәргә әҙерләнмәй барған, дәрестә уҡытыусыһы тыңламай ултырған мәлдәре лә бар шул. Әсәһе, улым уҡыһын, тип әллә күпме гәзит-журналдар алдыра, шуларҙы ла хатта уҡымай бит, онотҡанда бер генә ҡулына алып биттәрен аҡтарып ҡына сыға. Ә унда күпме ҡыҙыҡ нәмәләр яҙыла! Әммә оҙаҡ оялып барырға тура килмәне уға, ниндәйҙер бер ауылға барып инделәр.

Шул мәл тыҡрыҡтан, һелкетә баҫып, сәсебашы туҙған бер ҡатын килеп сыҡты. Бик ярһығайны ул, шарҙай күҙҙәре зәһәр осҡондар сәсә. Эҙләгән кешеһен тапҡандай, шәп-шәп атлап Айҙарҙар торған яҡҡа атланы.

– Һай-һай! Ҡалай эре торған булаһың! – ҡатын төкөрөктәрен сәсеп-сәсеп, Айҙарҙарҙы ҡаршыларға сыҡҡан Әүхәҙи бабайҙы әрләргә кереште лә китте. Малай уның һүҙҙәренән бер нәмә лә аңламаны, аптырап, бер олатаһына, бер Әүхәҙи бабайына, бер әлеге ҡатынға ҡараны. Ниңә олатаһы ла, бабайы ла бер нәмә лә өндәшмәй икән? Ҡарап тик торалар, тип йәне көйҙө. Нахаҡ һүҙгә күпме түҙергә була? Теге ҡатын шулай төкөрөктәрен сәсә-сәсә әрләшеп, китеп барҙы. Шунда ғына: “Йәлләйем мин уны”, – тип ҡуйҙы. Әүхәҙи бабай.

– Ә ниңә олатай, һин дә, Әүхәҙи бабай, һин дә, бер нәмә лә өндәшмәнегеҙ ул?

– Иҫәр еңдем тиер, аҡыллы ҡуйҙым тиер, улым, – тип йылмайҙы Әүхәҙи бабай, Айҙарға ҡарап.

– Мөхәммәт менән уның илсеһенә лә бына шулай бер кеше осрай, – тип олатаһы ейәненә хикәйәт менән яуап бирҙе. – Ул бәйғәмбәрҙең эйәрсененә үс тотоп йөрөгән була. Уңайы тура килгәс, юҡ һылтауҙы бар итеп, әрләргә тотона. Быныһы ла бер аҙ өндәшмәй торғандан һуң түҙмәй, үҙе лә әр һүҙҙәре менән яуап ҡайтара башлай һәм икәүләп талашып китәләр. Шул ваҡыт Мөхәммәт тауыш-тынһыҙ улар янынан китә. Аҙаҡ эйәрсене уға үпкәһен белдерә:

– Ниңә һин шул яуыз менән минең үҙемде генә ҡалдырҙың?

– Ул һине әрләгәндә, әммә һин өндәшмәй торғанда, баш осоңда унлаған фәрештәне күрҙем, фәрештәләр һине яҡлай ине. Әммә һин уның менән талаша башлағас, фәрештәләр юҡҡа сыҡты. Мин дә киттем, – тип яуаплай Аллаһ Илсеһе.

Һинең, улым, сабыр төбө – һары алтын, йә өндәшмәүең – алтын, тигәндәрен ишеткәнең бармы? Ҡайһы ваҡыт бына ошолай өндәшмәй ҡалыуың күп ығы-зығыны ситләп үтергә ярҙам итә ул…

Айҙар олатаһына һоҡланып ҡараны: бик-бик аҡыллы кеше ул!

Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ

# ФРОНТ ҺЫҘЫҒЫНЫҢ КЕСКӘЙҘӘР ЙӨРӘГЕ АША ҮТКӘНЕ



**Генералдарыбыҙ, маршалдарыбыҙ, ҡулдарына ҡыҙыл ҡәләм алып, фронт һыҙығын нисек кенә билдәләмәһендәр, ул һыҙыҡ, топографик карталарҙа ғына түгел, ҡарар күҙгә күренмәй генә, тылдағы, дөрөҫөрәге, тылдағы фронтта көрәшеүсе һәр кеше, шул иҫәптән кескәйҙәр йөрәге аша ла үтә. Кескәйҙәр тигәнем – минең быуыным. Был быуындың ул саҡтағы хәлен шағир булып танылған тиңдәштәремдең шиғырҙарынан да күҙ алдына килтерергә була. Гитлерҙың яуызлығы арҡаһында, атайһыҙ ҙа, ағайҙарһыҙ ҙа ҡалған халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың:**

**Нәҫелемдә ҡалған ир затынан**
**Иң олоһо инем –**
**Алты йәшлек аҡһаҡалы инем, –**

**тигәнендә бик күп тиңдәштәребеҙ кисергән фәжиғаи-драматик яҙмыштар хаҡындағы ауыр кисерештәр ятыуын тоймау һәм ул юлдарҙы тулҡынланмай уҡыу мөмкин түгел.**

**Яҙмыш уртаҡ булһа ла, беҙҙең һәр беребеҙ – бер шәхес. Шуға ла һәр беребеҙ шул уртаҡ яҙмышты, билдәле, үҙебеҙсә кисерҙе. Әле тәҡдим иткән яҙмаларым һуғыш башланғанда, ике йәштә генә булып, ул тамаланыуға табан иҫ белә килә үҙем күргән, үҙем кисергәндәр – моғайын ошо әйткәнемә бер дәлилдер.**

## Иң йыш әйтелгән һүҙ һәм тамаҡ төбөндәге төйөр

Миңә ул саҡта күп булһа дүрт йәштәр самаһы булғандыр. Хәҙерге йәшем бейеклегенән уйым менән шул заманға урап ҡайтһам, башыма шундай бер фекер килә: “Әгәр ҙә мәгәр, хәҙерге замандағы һүҙ сүпләүсе тикшеренеүселәр кеүек, берәйеһе, ҡулына ҡәләм, счет алып (мәғлүмдер ки, ул саҡта калькулятор һәм компьютер иҫкә төшөр, төшкә инер нәмә түгел ине): “Тәүлегенә иң йыш ҡулланылғаны ниндәй һүҙ икән?” – тип, һанап йөрөй торған булһа... Ул, моғайын: “Һуғыш” тигән һүҙ икән дәбаһа!” – тип һығымта яһар ине. Һығымтаһының аныҡлығын нигеҙләү өсөн, көндәр буйы ҡабат-ҡабат тикшерһә лә, бер генә кешенең артынан тотам да ҡалмай, һанап йөрөһә лә, тәүге һығымтаһы мөтли үҙгәрмәҫ ине”.

Шаштырмайым, һүҙҙең ҡулланылыш йышлығын тикшереүсе булмаһа ла, бәләкәй генә булһаҡ та, иң йыш ҡулланылғаны әлеге һүҙ икәнен ул дәүерҙә беҙ ҙә яҡшы белә инек инде. Иртән торғандан алып кис ятып киткәнсе, өйҙә лә, урамға сыҡһаҡ та, ишетә инек беҙ ул һүҙҙе.

Әсәйем эңерләтеп кенә колхоз эшенән ҡайта. Ишектән инер-инмәҫтән үк:

– Мөхәмәткилде ағайығыҙҙан хат булманымы? – тип һорай һалыр ине.

– Булманы шул, әсәй, – ти һалабыҙ өйҙәгеләр.

– Ҡасан ғына бөтә инде шул һуғыш тигәне! Хоҙайымдан булып, шул Гитлер тигән йәшәмәгеренә беҙҙең күҙ йәшебеҙ төшһә ярар ине! – ти ҙә әсәйебеҙ усаҡҡа ут яға һалып, күҙ терәп торған Айғашҡабыҙҙы һауыу йүнен күрә башлай. Күҙ терәп торған, тим. Сөнки беҙҙе ҡатығы, ҡорото, һирәк-мирәк булһа ла, ҡаймағы, майы менән һыйлап тора бит ул. Әйткәндәй, ниңә һирәк-мирәк булһа ла, тип әйтте был, тиһәгеҙ, аңлатып китәм. Һирәк-мирәк, сөнки бер һыйыр башына һигеҙ кило һары май тапшырабыҙ (Тапшырабыҙ тигән һүҙем – магазинға бирәбеҙ, тигәнем булыр. Беҙҙең өсөн магазин ни ҙә дәүләт ни – икеһе бер төшөнсәгә эйә ине. Ул йәштә шунан арыһын беҙгә белеү ҡайҙа). Шуның өҫтөнә ике кило брынза урынына ла май алалар. Бер саҡ әсәйемдән:

– Брынза нимә була ул? – тип һораным. Ул:

– Һарыҡ эремсеге була, ти. Уны күргән-ниткән юҡ. Кем ашайҙыр инде, – тине. Йылдар үткәс кенә белдем: грузин ризығы икән ул. Шунда башыма шундай уй килде: Сталин – грузин, Берия менән тағы кеме – грузин. Күрәһең, үҙҙәре яратҡан ризыҡ булғас, ҡалғандарҙың тамағына ла хуш килә, тип белгәндәрҙер.

Ситкәрәк киттем.

Беҙҙең иң яҡын күршебеҙ, тиңдәшем Хәбир. Әсәйҙәр эштән ҡайтҡанда, уйындан айырыла алмай, уларҙа булһам, уның әсәһе Дәүләтбикә инәйемдең ауыҙынан да, иң элек әлеге һорауҙы ишетәм. Тик инәйем, әсәйемдең һорауын төҙәткәндәй итеп, уны оҙонайта биреп, "ағайыңдар"ҙан һалдыра ла:

– Атайыңдан да юҡмы хат? – тип ҡуя. Ни өсөн тиһәң, Хәбирҙең Ғәлимйән, Сабирйән тигән ағалары ла, атаһы ла һуғышта ине. Ул саҡта ауылыбыҙҙың (ҙурайғас, шуны белдем: беҙҙең ауылдың исеме, улай-былай ғына түгел, Нәби – "бәйғәмбәр" тигән һүҙҙең синонимы икән ул) ике-өс малайҙан башҡа барыһының да:

– Атай! – тип өндәшер, уныһының иһә:

– Әү, балам! – тип, башын һыйпап, һыртынан ҡағыр кешеһе юҡ ине. Шуғамылыр, әллә, атайым вафат булғанда, иҫ белмәй ҡалыуым арҡаһындамы, ғаиләлә ундай вазифалы ир кеше булырға тейешлеге хаҡында ул саҡта башыма ла килмәй ине. Һуғыш бөтөп, башҡалар атайлы була башлағас ҡына, уларға көнләшеү менән бергә атайһырау тойғоһон кисерергә тура килде. Тура килде, тимсе. Ул тойғо, анығын әйткәндә, йотоп булмаҫ төйөр булып, бөгөн булһын тамаҡ төбөндә тора.

## Беҙҙең өйгә "ҡара ҡағыҙҙың" ҡағылмағаны

Тиҙҙән ололар һөйләшеүенән беҙҙең телгә бығаса ишетелмәгән өр яңы һүҙҙәр килеп инде. "Ҡара ҡағыҙ", "ятып ҡалған", "хәбәрһеҙ ғәйеп булған" тигән һүҙҙәр ине ул. Ҡара ҡағыҙ тигәне тиңдәштәрем Хәбирҙәргә, Әбүкарам менән Ғәликарамдарға, Булаттарға, Юлмөхәмәттәргә. беҙҙән өлкәнерәк Ғилман, Марс, Ғизетдин, Әмир, Бәшир ағайҙарға, урам аша күршеләребеҙ Әсмә апайҙарға, Юлмөхәмәттәргә һәм тағы бик күптәргә килде.Тора-бара был исемлек үҫте лә үҫте... "Ҡара ҡағыҙ" килтергән хәбәрҙең тәүгеһе ифрат яман һүҙ булған икән. Ул "атайығыҙҙан йә ағайығыҙҙан мәңгелеккә төңөләгеҙ" тигәнде аңлатҡан икән ул. Сираттағы почта килгәндән һуң, күп илауҙан күҙҙәре шешенеүенән үк, кемгә ундай хәбәр килеүен белеп була ине. Ә икенсе хәбәр хаҡында ололар өмөт менән шулай тиешәләр ине:

Ана фәлән ауылда фәлән кеше хаҡында ла "хәбәрһеҙ ғәйеп булған" тигән ҡағыҙ килгән. Бер ваҡыт үҙе ҡайтып төшкән... Алла теләһә, беҙҙекеләр ҙә ҡайтып төшөр...

Шулай булмай һуң. Ул хәтле мәхшәр, ул хәтле ғәм араһында юғалыуы аһһат ҡына инде ул...

Йылдар үткәс кенә белдем. Ундай ҡағыҙҙар беҙҙең өйгә инмәгән. Уның сәбәбе шул булған. Ун етеһе тулыр тулмаҫтан һуғышҡа барып ингән Мөхәмәткилде ағайым тарихҡа "Курск дуғаһы" тигән исем менән яҙылған бәрелештең тәүге көнөндә үк ҡаты яраланған. Яраланһа ла, иҫе юғалғансы, автоматтан атыуын белгән. Аҙаҡ һуғыш хәлдәрен иҫкә алғанында: "Шундай мәхшәр. Кем ҡайҙан атҡанын да белерлек түгел ине", – тигәне хәтерҙә. Яу ҡырынан уны Өфөгә оҙаталар. Яраһы уңалыуға, строевой хеҙмәткә яраҡһыҙ, тип Мәскәүгә ебәрәләр. 1946 йылдың майында илгә ҡайтҡансы, шунда хәрби төҙөүсе булып хеҙмәт иткән ул.

Ә атайым хаҡында беҙгә "ҡара ҡағыҙ" килмәүенең сәбәбе шул: һуғыш башланыуға һигеҙ ай үтте тигәндә генә, Әжәл уны яу ҡырында түгел, өйөбөҙгә килеп таба. Әсәйем биш балаһы менән зар илап тол ҡала. Ул саҡта атайыма ни бары ҡырҡ дүрт кенә йәш булған. Вафат булмаһа, тиңдәштәренән ҡалмай, мотлаҡ яуға киткән булыр ине. Ҡорал тоторға уны өйрәтәһе булмаған. Беренсе донъя һуғышы, Граждандар һуғышы тигән ике тамуҡты үткән кеше башҡаларҙы үҙе өйрәтә алыр ине.

Атайҙың ауырыуына ни сәбәп булған тигәндә, шул сәбәп булған. Үткән быуаттың 30 йылдарының башында уҡ ҡупҡан репрессия тулҡыны уны концлагерға илтеп ташлай. Шунда ул һәм яҡташы Сабирйән сәсән Мөхәмәтҡолов (Әбделмәмбәт ауылы) үҙ теләктәре менән Аҡ диңгеҙ – Балтик каналын соҡоу эшенә юлыға. Төбө һәм тирә-яғы тотҡондар һөйәгенән торған был канал Сабирйән сәсән өсөн дә һуңғы төйәк була. Ударниктарса эшләгән атайыма иһә йәне сыҡмаған кәүҙәһен тыуған илгә алып ҡайтырға насип иткән Хоҙай Тәғәлә. Имен ҡайтыуының иҫтәлеге булып мин тыуғанмын.

Концлагерҙа билбыуарҙан һалҡын һыу кисеп, канал соҡоу үҙенекен иткән. Атай шуға мандый алмаған.

Һуғыш башланғас, байтаҡтар "ауырып китә". Әжәл ауырыуы менән ауырып ятҡан атайымды ла шундайҙарҙай күреп (моғайын да, теге мәлдә уның репрессияға юлығыуына булышыусыларҙың ярҙамы менәндер), күтәреп санаға һалып, конвой менән хәрби комиссариатҡа медкомиссияға алып баралар. Ана шунан ҡайтҡас та, йәғни 1942 йылдың 14 мартында беҙ атайһыҙ ҡалғанбыҙ ҙа инде. Әйткәндәй бишенсебеҙ, Гәүһәр ҡарандашым, атайымды арыулап, ҡапҡанан алып сығып ҡына барғанда, Дәүләтбикә инәйемдәрҙең йортонда ҡыҙ бала сифатында донъяға килә.

**(Дауамы бар.)**

# Ырғыҙ-Кәмәлек башҡорттары

Мәшһүр Урал тауҙарының көньяҡҡа табан осланышы булып, Волга менән Яйыҡ йылғаларын бүлеп ятҡан Дөйөм Һырт исемле ҡалҡыулыҡтан ағып сыҡҡан һәм данлыҡлы Волгаға (Оло Иҙелгә) барып ҡойған Ырғыҙ һәм Кәмәлек йылғалары буйҙарындағы иркен дала борондан башҡорт ырыуҙарының йәйләү урындары булған. 922 йылда был яҡтарҙа булған ғәрәп хәлифәте сәркәтибе Әхмәт ибн Фаҙлан былай тип яҙып ҡалдырған: **“Һамар, Һыуыҡ һәм Ҡондоҙло йылғаларын аша сығып, башҡорт кәбиләләре менән осраштыҡ”.** Тағы яҙма ҡомартҡыларға килгәндә, билдәле урыҫ яҙыусыһы граф Лев Толстойҙың Кәмәлек башҡорттарында ҡунаҡ булып ятыуҙарын иҫкә төшөрөп булыр ине. Шулай ҙа был яҡтың тормошон киң ҡоласлы хикәйәләп, бар халыҡҡа еткереү бурысын ошо яҡта тыуып үҫкән Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романы башҡарҙы.



**Төрки ҡатын-ҡыҙҙары араһында беренсе роман авторы Һәҙиә Дәүләтшина. Әхмәт ЛОТФУЛЛИН портреты.**




Тарихҡа байҡау яһағанда, Ырғыҙ буйынан бригадир Буранбай Ҡалмантаевтың 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашып, Парижды алғанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн дворян титулына эйә булыуы, артабан хәрби хеҙмәттә генерал дәрәжәһенә етеүе билдәле. Яҙыусылар Рәшит Ниғмәти, Хәсән Бәшәр, Һәҙиә Дәүләтшина, Ғөбәй Дәүләтшин, дәүләт эшмәкәрҙәре Харис Йомағолов, Фатима Мостафиналарҙың исемдәре халыҡҡа яҡшы таныш.

Хәҙер был күркәм ерҙәр Рәсәйҙең өс өлкәһенә (Ырымбур, Һарытау һәм Һамар) һәм Ҡаҙағстанға бүленеп тороп ҡалды. Кәмәлек буйын төйәкләгән башҡорт ауылдары Һарытау өлкәһенең Перелюб, Пугачев райондарына ҡарай, ә Ырғыҙ буйы ауылдары – Һамар өлкәһенең Оло Глушица һәм Оло Чернигов райондарында. Был яҡтарҙа башҡорттарҙың һаны 10 меңгә етә.

Рәсәйҙә мәғариф системаһын үҙгәртеп ҡороу ҡырауы Ырғыҙ-Кәмәлек буйындағы башҡорт ауылдарының яҙмышына ҡырғын булып төштө – бөләкәй ауылдарҙа мәктәптәр ябылып, уларҙан балаларҙы рус телле ҙурыраҡ ауылдарға йөрөтөп уҡыта башланы. Йәштәр үҫеп еткәс тә ситкә китеп торған ауылдар юҡҡа сығыу сигендә.

Һамарҙа һәм Һарытауҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙары бүлексәләре эшләй. Был ике өлкә менән Башҡортостан тарафынан ике яҡлы килешеүҙәр төҙөлгән һәм Башҡортостандың мәҙәниәт вәкилдәре Ырғыҙ-Кәмәлек буйҙарына йөрөп тора.

«Хоҙай үҙе кыҙығыр...» Ш. Бабич



# ӨФӨ КҮЛЕ

Башҡортостандың баш ҡалаһына исем биргән Өфө (Уфимка) йылғаһы Ҡатай ырыуы башҡорттарының аҫаба ерҙәрендә, хәҙерге Силәбе өлкәһенең Ҡарабаш ҡалаһы янында ятҡан Өфө күленән ағып сыға. Ағиҙел, Күгиҙел (Дим) менән сағыштырып, түбәнге ағымында халыҡта Ҡариҙел иселе алған был йылға башланған күл Ҡарабаштан биш саҡырым төньяҡтараҡ урынлашҡан (Балаҡатай районының Һәйбәт ауылынан 40 саҡырым самаһы). Оҙонлоғо 1,5 саҡырым, киңлеге 800 метр, тәрәнлеге 2,5 метрға етә. Ярҙары ҡуйы әрәмә менән ҡапланған.

Оло Башҡортостандың хозур мөйөшө булған тау-урманлы күлдәр иленең алтын, баҡыр, тимер мәғдәндәре һәм аҫылташтары XVIII быуатта был яҡты колонизациялауға һәм вәхшиҙәрсә талауҙы башлауға төп сәбәп була. Ҡарабаш тауында барлыҡҡа килгән баҡыр иретеү заводы ла – был яҡтағы хәүефле объекттарҙың береһе.

Урындағы халыҡ Өфө күленән баш алған йылғаны Оло Өфө (Большая Уфа) тип йөрөтә, тик түбәнге ағымдарҙа ул ниңәлер “бәләкәсәйә” бара – Уфимкаға әйләнә.



Өфө күленең Йыһандан күренеше


Ҡарабаш тирәләре экологик хәүеф аҫтында

„АМАНАТ" журналы
йондоҙлоғо
2010



Илмир Мо


TANCE









## Субару Импреза

Японияның билдәле “Subaru” автогигантының (исеме башҡортса Өлкәр йондоҙлоғон аңлата) машиналары, автораллиҙарҙа һәр ваҡыт алдынғы урындарҙы яулап, донъяла тиҙлек образы булараҡ танылған. Әммә һуңғы ваҡытта “өлкәрселәр” ябай ҡулланыусыны ла уйлай башланы. Мәҫәлән, яңы “Импреза” моделе, ҡулланыусыларҙың төрлө-төрлө булыуын иҫәпкә алып, төрлө илдәр өсөн бик күп варианттарҙа сығарыла. Япон техникаһының ышаныслылығы, алдынғылығынан тыш, уларҙа һәр илдең юл һәм тәбиғәт шарттары ла, водителдәрҙең талапсанлығы ла иҫәпкә алына. Ҡеүәте 150 ат көсөнә торошло, “евро-5” талаптарына яраҡлаштырылған моторы ҡала шарттарында 100 саҡырымға 9,6 литр ғына бензин “ашай”. Шулай уҡ был машинаның дизелдә һәм электрҙа эшләүсе варианттары ла бар.

## «Аманат» коллекцияһы




## “Зубр”

Диңгеҙ пехотаһы тигән төшөнсә беҙҙең армияла күптән билдәле булһа ла, уға күнегеүе ҡыйын: пехота йәйәүле ғәскәр тигәнде аңлата, ә диңгеҙҙә йәйәү йөрөп буламы ни? Шуға ла Бөйөк Ватан һуғышынан һуң, яу яландарында ниндәй данға күмелһә лә, бөйөк маршал Жуков “ярҙамы” менән, диңгеҙ десанты ғәскәрҙәре беҙҙең илдә әллә ни үҫеш алып китә алмай. 1964 йылда “Алмаз” конструктор бюроһы нигеҙ һалған “Зубр” десант караптары ла, донъяла иң яҡшы өлгө һаналыуға ҡарамаҫтан, төрлө илдәргә таратылып бөтөлә.

Һауа мендәрендә йөҙөү сәбәпле 1,6 метр ғына тәрәнлектәге һыуҙа ла йөрөй алған был карап дүрт танк һәм ярты мең десантсыны 500 саҡырымға тиклем ергә алып барып төшөрә һәм, улар һуғышҡа ингәс тә, үҙ ҡоралы менән ярҙам итә ала. Был эшенән тыш, “Зубр” юлында дошман караптарына ҡаршы миналар ҙа ҡуйып бара ала.






# “ТЕКТОНИК ЙҮНӘЛЕШЕНДӘ ИЖАД ИТЕҮ ОҠШАЙ”

**Башҡорт эстрадаһы күгендә әленән-әле яңы йондоҙҙар балҡып тора. Һәр береһенең исемен иҫеңдә ҡалдырып ҡына өлгөр. Ҡайһы ғына йырсыны алып ҡарама, улар эстрадаға үҙҙәренсә яңылыҡ индерергә тырыша. Хәҙерге тамашасыны ни менәндер һоҡландырыу еңелдән түгел. Бының өсөн бөтмәҫ тырышлыҡ, оло сәм, сағыштырғыһыҙ талант һәм ҡабатланмаҫ үҙенсәлек талап ителә. Шундай йәштәребеҙҙең береһе, “Йәшлек-шоу – 2009” конкурсында “Йыл асышы” номинацияһында еңеүсе Илмир Моталов беҙҙә ҡунаҡта. Ул Хәйбулла районының Йәнтеш ауылында тыуып үҫкән. Әлеге ваҡытта БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында белем ала.**

**Илмир, моғайын да, һөйләшеүҙе эстрадаға ҡасан килеүеңдән башлаһаҡ, дөрөҫөрәк булыр.**

Эстрадаға ике йыл элек тирәһе аяҡ баҫтым. Тәүҙә күптәр үҙ иткән попса йүнәлешендә йырлап йөрөнөм. Тик ижадым миңә әллә ни ҡәнәғәтлек килтермәне. Шуға ла заманса тектоник стиленә мөрәжәғәт итергә булдым. Сәхнәгә сығыуы башта ауырыраҡ булды, ни өсөн тигәндә, мәктәптә йырлап йөрөмәнем, ниңәлер ояла торғайным. Йыр-моң донъяһына аяҡ баҫырға ярҙам иткәндәре өсөн Радик Юльяҡшин менән Данил Сөләймәновҡа рәхмәтлемен.

**Тектоник йүнәлеше хаҡында һөйләп үтсе...**

Был стиль Францианан килгән. Әлеге ваҡытта башҡорт йәштәре араһында ярайһы уҡ танылыу яулай бара. Хәрәкәттәре бик ҡатмарлы. Бейергә өйрәнгәндә хатта ҡулдар сеймәлеп бөтә торғайны. Тектоникты йырламайҙар, ә бейейҙәр. Ә мин уларҙы ҡатыштырҙым. Тектоник күп репетициялар талап итә. Махсус рәүештә шөғөлләнеү өсөн “Е-дэнс” мәктәбенә лә йөрөйөм.

**Йырҙарыңды кем ижад итә?**

Көйөн Радик Юльяҡшин ижад итһә, һүҙҙәрен үҙем яҙам.

**Ниндәй ҡыҙҙар оҡшай?**

Аҡыллы, тыныс, күп һөйләмәгән тыйнаҡ башҡорт һылыуҙарын яҡын күрәм. Һәм тағы ла оҙон буйлыларҙы яратам (йылмая).

**Киләсәктә үҙеңде кем итеп күрергә теләйһең?**

Матур һорау. Тел белгесе булырға хыялланам. Ғөмүмән, үҙемде профессор итеп күҙ алдына килтерәм. Йыр – ул минең өсөн бары тик хобби ғына.

**Ниндәй уй-хыялдар менән янып йәшәйһең?**

Заманса бейеү мәктәбе асҡым килә. Шулай уҡ данлыҡлы DJ Gabba менән бергә эшләргә тигән теләк тә йәшәп килә. Әлеге ваҡытта DJ Serhio менән һөйләшеп, килешеп ҡуйылған. Улар менән бергә уртаҡ трек ижад итергә аҙһа, бик шат булыр инем.

**Сәхнәгә ниндәй кейемдә сығырға ятаһың?**

Аҡ төҫтә кейенергә тырышам. Сөнки был төҫ неон утында матур булып күренә.

**Журнал уҡыусыларға нимә теләрһең?**

“Аманат”тан айырылмаһындар, башҡорт йыр-моңдарын тыңлаһындар һәм заман менән бергә атларға ынтылһындар.

**Ихлас әңгәмәң өсөн ҙур рәхмәт һиңә, Илмир. Бөтә уй-хыялдарың да тормошҡа ашһын, яңы үрҙәр юлдаш булһын!**

**Нәркәс АЛСЫНБАЕВА әңгәмәләште.**

## БЕЛЕШМӘ

**ТЫУҒАН КӨНӨ –** 1988 йылдың 23 июне;

**ЯРАТЫП БАШҠАРҒАН ЙЫРЫ –** “Электродонъя”;

**ЯРАТҠАН ЙЫРСЫҺЫ –** Айҙар Ғәлимов;

**ЯРАТҠАН АШ-ҺЫУЫ –** әсәһе бешергән ризыҡтар;

**БАРЫРҒА ТЕЛӘГӘН ИЛЕ –** Төркиә.



МЕДИЦИНА



# Сәләмәт булығыҙ!



# КОНТАКТЛЫ ЛИНЗАЛАР

**Һинең синыфташың насар күрә, һәр саҡ күҙлек кейә һәм алғы партала ултыра. Ә бөгөн ул дәрескә күҙлекһеҙ килде һәм, бер нәмә лә булмағандай, артҡы рәткә барып ултырҙы. Мөғжизәме? Юҡ, ул бары контактлы линзалар кейә башлаған. Статистика буйынса һәр өсөнсө күҙлекле кеше берҙән-бер көндә линзаларға күсә. Быға аптырарға кәрәкмәй, сөнки линзаның мөмкинлектәре күберәк.**

**Шулай итеп:**

йөҙ-ҡиәфәтеңә тура килгән күҙлек һайларға тип ҡаңғырмайһың;

йәй көнө рәхәтләнеп ҡояштан һаҡлаусы ғәҙәти күҙлек кейәһең;

спорттың күп төрҙәре менән шөғөлләнә алаһың;

шаярғанда, уйнағанда күҙлек ватылыр тип ҡурҡырға кәрәкмәй;

күҙлектән айырмалы, линзаларҙа күҙ ҡырыйы менән күреү һәләте сикләнмәгән;

линзалар +20-нән – 20 диоптрийға тиклемге күреү һәләтен төҙәтә. –8 диоптрий булғанда күҙлек быялаһының ниндәй ҡалынлыкта икәнен самалау әллә ни ҡыйын түгел.

Линзалар нык йоҡа материалдан эшләнә, күҙҙә торғаны бөтөнләй һиҙелмәй. Уларҙы иртәнсәк кейеп, йоҡо алдынан ғына сисә алаһың. Тик линзаларҙың да медицина препараты икәнен иҫтән сығармайыҡ. Шәкәр диабеты, кератит (мөгөҙсәнең ялҡынһыныуы), ҡалҡан биҙ ауырыуҙары булғанда, линза кейергә ярамай.

Оптика салонында офтальмолог күреү һәләтен тикшереп, ошо үлсәмдәр нигеҙендә линзалар һайларға ярҙам итергә тейеш. Линзалар ниндәй материалдан эшләнеүе (йомшаҡ һәм ҡаты) һәм кейеү срогы буйынса (бер көнлөк һәм оҙаҡ кейеү өсөн тәғәйенләнгән) айырыла.

Ҡаты линзалар ҡаты полимерҙарҙан эшләнә, астигматизм һәм мөгөҙсә дистрофияһы диагнозы ҡуйылған кешеләрҙең күреү һәләтен төҙәтеү маҡсатында ҡулланыла. Улар елгә, ҡоро һауаға бирешеп бармай, ҡулланыу ваҡыты ла ике йыл. Тик өйрәнеүе оҙағыраҡ. Йомшаҡ линзалар йомшаҡ полимерҙарҙан эшләнә, улар күрәшлекте, үтәғарауҙы, астигматизмды төҙәтеү өсөн уңайлы, косметик маҡсаттарҙа ла кейергә мөмкин. Линзаның был төрө һауаны яҡшы үткәрә, кейгәндә лә уңайһыҙлыҡ тыуҙырмай, өйрәнеүе лә еңел. Етешһеҙлеге шунда – тиҙ сафтан сыға.

















## Бер көнлөк линзалар

Бер көнлөк линзалар иң яҡшыһы һәм зыянһыҙы. Линза өҫтөнә саң ултырып өлгөрмәй, махсус шыйыҡсаға һалырға кәрәкмәй. Көндәлек тормошта ла, сәйәхәт иткәндә лә, ҡунаҡҡа барғанда ла уларҙы ҡулланыу бик уңайлы.

## Оҙайлы кейеү өсөн тәғәйенләнгән линзалар

Улар ике аҙналыҡ, бер ай, өс ай, ярты йыл кейә торған була. Көн һайын иртән кейеп, йоҡо алдынан мотлаҡ сисеп, контейнерға һалырға кәрәк.

Линзалар менән йоҡларға ярамай. Күҙҙәр ял итергә тейеш! Оҙайлы линзалар ентекле тәрбиә талап итә. Быға әҙерһеңме? Үрҙә әйтеүебеҙсә, уларҙы көн дә махсус шыйыҡса менән сайҡатып, кис көнө йәнә яңы шыйыҡсаға һалырға кәрәк. Ҡулланыу срогы сыҡҡас та ташларға онотмағыҙ.

## Ҡулланыу буйынса ҡағиҙәләр

Линзаларҙы кейер һәм сисер алдынан ҡулды һабынлап йыуығыҙ.

Линзаларҙы махсус шыйыҡса һалынған контейнерҙа һаҡлағыҙ, шыйыҡсаны көн һайын алмаштырып тороғоҙ.

Яңы линзаны бокстан силикон осло махсус эҫкәк ярҙамында алығыҙ.

Көҙгө алдында кейегеҙ.

Табиптан линзаны нисек кейергә һәм сисергә өйрәнегеҙ.

Аллергия булғанда линза урынына күҙлек кейегеҙ.

Күҙҙәрҙе ышҡымағыҙ, инфекция эләгеүе ихтимал.

Линза кейгәндән һуң ғына макияж һалырға кәрәк.

Һыуыҡ, тымау тейгәндә, линза кейергә ярамай.

Берҙән-бер көндә дуҫтарыңды аптыратҡың йәиһә ниндәйҙер кисәлә һоҡланғыс күренгең киләме? Төҫлө линзалар ярҙамында тышҡы йөҙ-ҡиәфәтеңә үҙгәреш индерә алаһың. Мәҫәлән, үҙеңдең күҙҙәрең ҡуңыр булып, берәй ваҡыт зәңгәр күҙҙәр менән килеү шәп тә инде! Әлбиттә, ниндәй төҫтәге линзаны һайлау һәр кемдең шәхси эше.

**Ф. НУРИЕВА әҙерләне.**




# ТӘТЕҮӘЛ

Аҡ сәпсектән саҡ ҡына ҙурыраҡ был ҡошсоҡто һыу буйҙарында йәй буйына һәр кемдең күргәне барҙыр. Гел һыу янында йәшәүе, иртә яҙҙан уҡ килеүе һәм тышҡы ҡиәфәте уны сәпсеккә оҡшаш итә. Әммә сәпсекте һәр ерҙә, хатта ҡала урамдарында ла осратырға мөмкин, ә тәтеүәл фәкәт һыу ҡошо. Урыҫтар уны зуек, перевоз тип атай. Был йылғыр ҡош үҙенең яңғырау тауышы менән дә, йылғаның бер ярынан икенсе ярына өҙлөкһөҙ осоп йөрөүе менән дә иғтибарҙы йәлеп итә. Осоуы сәпсектеке һымаҡ тулҡынлы түгел, ә тиҙ һәм тура, артыҡ бейеккә менмәй, һыу өҫтөнән генә оса. Шул уҡ ваҡытта ул яҡшы йөҙә, тәпәйҙәрендә һыу ҡоштарына хас ярылары булмаһа ла, бик тәрәнгә сумып та китә ала. Бер ҡасан да туптарға йыйылмайҙар, күберәк парлап осрайҙар. Һыу буйҙарында таш араларынан был ҡошсоҡтар бик йылдам йүгереп йөрөй, бер ҡасан да тик тормай.



Тәтеүәл бик етеҙ ҡошсоҡ

Беҙҙең илдә тәтеүәлдәр һәммә ерҙә лә йәшәй. Ҡасандыр улар хатта һунар ҡошо ла иҫәпләнгән. Тик хәҙер, күрәһең, үтә бәләкәй булғанлыҡтарынан, улар һунарсыларҙы ҡыҙыҡһындырмай.



Тәтеүәл ояһында

Йәшәйеш йәһәтенән тәтеүәл сәпсек һымаҡ уҡ әрһеҙ: һыу буйындағы таш аҫтарында, төҙөлөш майҙансыҡтарындағы ярыҡ-йороҡта, оя тимәһәң хәтере ҡалыр майҙансыҡ яһай ҙа, шунда дүрт йәшкелтсыбар йомортҡа һала. Йомортҡаларҙы ата менән инә ҡош алмашлап баҫалар, балаларын бик ҡурсалап үҫтерәләр. Йылыраҡ яҡтарҙа уларҙың йомортҡаны ҡомға күмеп ҡалдырыуы ла күҙәтелгән.



Тәтеүәл балаһы менән

Асыҡ урында, шау таш араһында йәшәһәләр ҙә, ояларын табыуы ла, балаларын күреүе лә ҡыйын. Оло ҡоштарҙың да маскировкаһы бик оҫта уйланылған – арҡаһы һуйырташ төҫөндә.



# Дюбел



**Үткән сығарылышта беҙ һеҙгә сөйҙәр тураһында һөйләгәйнек. Бөгөн иһә уларҙың “туғаны” – дюбел менән таныштырабыҙ.**



Заманса “сөйҙәр”һеҙ ремонт эштәрен күҙ алдына ла килтереп булмай. Бигерәк тә хәҙер төҙәлештә кирбес, бетон материалдарына өҫтөнлөк бирелгәндә.

Дюбелде һайлағанда, нигеҙҙә, биш ҡағиҙәне иҫтә тоторға кәрәк: ҡағылаһы оҙонлоғон һәм дюбелгә төшкән ауырлыҡты, ул ҡағыласаҡ стена, түбә таҡтаһы, иҙәндең һ. б. материалдың ныҡлығын, шулай уҡ беркетеләсәк әйберҙең төрөн. Әгәр ҙә һатып алғанда күпме ауырлыҡты тотоп торасағына, беркетелә торған материалдың ныҡлығына икеләнһәгеҙ, ҡиммәтерәк булһа ла, ауыр әйберҙәр нығытыу өсөн ҡулланылғанын һайларға кәңәш итәбеҙ.

Бөгөн төҙәлештә ғәҙәти нейлон дюбел киң ҡулланыла башланы. Улар теләһә ниндәй стенаға ярай һәм 2-16 мм-лы шөрөптәр менән бергә ҡулланыла. Бының өсөн иң тәү стенаға тейешле диаметрҙа тишек тишәләр (бырауҙарҙың төрҙәре тураһында 2009 йылдың сығарылышында яҙғайныҡ). Һуңынан дюбелде ҡуйып, эсенә шөрөп боралар. Шөрөп ингән һайын нейлонды стенаға ҡыҫа бара.



Газобетон өсөн ҡулланылған дюбел дә киң таралған. Уның менән материалды беркетер өсөн дюбелдең үҙәге диаметрында тишенк тишәләр ҙә, яйлап ҡына сүкеш менән ҡағалар. Ныҡлығы шунан ғибәрәт: ҡабырғалары шөрөп һымаҡ боролобораҡ кереп ултыра ла, кирегә сығырға бирмәй.

Рам өсөн ҡулланылған дюбелдәр 60-360 мм оҙонлоғонда сығарыла. Улар ике төрлө була: ҡаты әйбергә һәм йомшаҡ бушыраҡ материалға ҡағылыусы. Бындай дюбелдәрҙең оҙон үҙәге бер нисә ҡат (шул иҫәптән буш, ҡыуыш урынды ла иҫәпкә алып) материалды тотоп тора. Рам өсөн ҡулланылған дюбелдәр тәҙрә һәм ишек коробкаларын, яңаҡтарын беркеткәндә файҙаланыла.



Стенаға рейка, нәҙек таҡталарҙы икеһе араһында ара (һауа) йәки йылытҡыс материал ҡалдырып беркетеү өсөн “дистанциялы” (юстировочный) дюбел ҡулланыла. Улар ике өлөштән тора: береһе стенаға беркетелә, икенсеһе – рейкаға. Был инде рейкаларҙы 0-30 мм-ғаса аралыҡта көйләүгә ҡулай.

Универсаль дюбелдәрҙең өҫтөнлөгө шунда: кирбестәрҙең бушыраҡ урынына инеп ултырғас, беркеткән саҡта “ҡорһағы” киңәйә һәм буш урынды “тултыра”, ныҡлап ултыра.

Пружина һымаҡ кире ҡайтмалы планкалы дюбел иһә элеп ҡуйылмалы түбәләр, предметты эсе бушыраҡ урынға беркетер өсөн ҡулланыла. Шулай уҡ люстра элгәндә лә алыштырғыһыҙ. Тишектән ингәндә дюбелдең ҡайтмалы планкалары ҡыҫылып тора. Ә материалдың эске яғына ингәс, пружина һымаҡ планкалар асыла. Уны һатып алғанда комплектта бер яғы ырғаҡлы, ырма (резьба) һалынған шпилькаларҙың булыуына иғтибар итегеҙ. Ошо шпилькалар дюбелдең эсенә бороп ултыртыла.

Пеноматериал, минерал мамыҡтан яһалған йылытҡыстарҙы беркетеү өсөн “утепледержатель” тигән дюбел һатыла. Ул кирбес йәки бетон стенаға сөйһөҙ, шөрөпһөҙ ҡағыла.

Йомшаҡ материалдарҙы беркетер өсөн ҡулланылған пластик һәм металдан яһалған дюбелдәр була. Улар ғәҙәттә гипсокартон беркеткәндә файҙаланыла. Шуға исеме лә “гипсокартон өсөн” тип атала. Ҡаҡҡан саҡта алдан тишек тишмәйҙәр. Бырау һымаҡ осло осо, шөрөп кеүек ырмаһы уға отвертка ярҙамында ла еңел генә стенаға үтеп инергә мөмкинлек бирә.

Киләһе һандарҙа “Оҫтахана” битендә ҡул эштәренә күсербеҙ. Сығарылышты байыраҡ итеү өсөн һеҙҙән дә хаттар, хеҙмәт дәрестәре, ауылдарығыҙ оҫталары тураһында һүрәтләмәләр, фотолар, тәкдимдәр, һорауҙар көтәбеҙ.



**Махсус сығарылышты алып барыусы Рәлис УРАҘҒОЛОВ ағайығыҙ.**






12 йәш. Ҡыҫала. Йырларға, ҡурайҙа уйнарға, саңғыла йөрөргә яратам. Буш ваҡытта синтезаторҙа көй яҙам, мәктәпкә барып, волейбол, баскетбол уйнайым. Йәштәштәрем хат яҙһа ине.

**Заһиров Рәфис.**
**453740, Учалы районы,**
**Ҡунаҡбай ауылы,**
**Шәкирйән Мөхәмәтйәнов урамы, 3.**
**Т.: 89638911604.**

* * *

13 йәш. Музыка тыңларға, бейергә, компьютерҙа уйнарға, баскетбол һәм волейбол уйнарға яратабыҙ. 12-15 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар хат яҙһа ине.

**452265, Илеш районы,**
**Тыпый ауылы, Мәктәп урамы, 25,**
**Гөлнара.**
**Т.: 89656689268.**
**Тыныслыҡ урамы, 69,**
**Гөлсәсәк.**
**Т.: 89603931652.**

* * *

Барығыҙға ла сәләм! **Мин Луиза Хужәхмәтова булам.** Кумирҙарым – хоккейсы Александр Радулов һәм Аврил Лавигн. Шөғөлдәрем хаҡында хатҡа яҙырмын.

**453396, Ейәнсура районы,**
**Яңыбай ауылы,**
**Салауат Юлаев урамы, 12.**

* * *

16 йәш. Ҡыҙ. Буш ваҡытта китап уҡыйым, телевизор ҡарайым һәм әсәйемә ярҙам итәм. 16 – 17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән смс йәки шылтыратыуҙар көтөп ҡалам.

**Мәксүтова Айгөл.**
**453680, Йылайыр районы,**
**Йылайыр ауылы,**
**Кириллов урамы, 2.**
**Тел.: 89273230136.**

* * *

14 йәш. Арыҫлан. Волейбол, футбол уйнарға, китап уҡырға яратам. Тиҫтерҙәремдән хат көтәм.

**Һөйөндөкова Фәзизә.**
**Ырымбур өлкәһе, Төйләгән районы,**
**Аллабирҙе ауылы, Мәктәп урамы, 9.**

* * *

14 йәш. Арыҫлан. Йырсыларҙан Радик Юлъяҡшин, Dany, Анжелика, Айҙар Муллағәлин оҡшай. 14-17 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәм.

**Ҡотлобаева Айгөл.**
**453061, Ғафури районы,**
**Еҙем-Ҡаран ауылы.**

* * *

15 йәш. Үлсәү. 14 – 16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәм.

**Лоҡманов Динир.**
**453625, Әбйәлил районы,**
**Амангилде ауылы,**
**Комсомол урамы, 33.**
**Тел.: 83477225119.**

* * *

10 йәш. Арыҫлан. Шөғөлдәрем – йыр-бейеү, шиғыр яҙыу. 10 –12 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар хат яҙһа ине.

**Дәминова Наҙгөл.**
**453185, Стәрлебаш районы,**
**Елембәт ауылы,**
**Мәктәп урамы, 10.**

* * *

14 йәш. Буға. Музыка тыңларға, китап уҡырға, һүрәт төшөрөргә әүәҫмен. 14-16 йәштәге ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки смс хәбәр көтәм.

**Рәхмәтуллина Гөлнәзирә.**
**452587, Балаҡатай районы,**
**Түбәнге Үтәш ауылы,**
**Еңеү тыҡрығы, 2.**
**Тел.: 89649511072.**

* * *

**Журналда адресым баҫылып сыҡҡас, күп тә үтмәй, Әбйәлил районынан Миләүшә исемле ҡыҙҙан хат алдым. Хатлаша торғас, уның менән иң яҡын әхирәттәргә әйләндек. Алсаҡ йөҙлө, изге күңелле дуҫым менән оҙаҡламай осрашып күрешергә лә уйлайбыҙ. Беҙҙе таныштырғаның өсөн ҙур рәхмәт һиңә, “Аманат”!**

**Зилиә ӘБСӘЛӘМОВА,**
**Өфөнөң 140-сы**
**башҡорт гимназияһы**
**уҡыусыһы.**

Ай, һылыу!

# Алағарай һылыуы

Таныш булайыҡ: мин – Аэлита Ғәлимова. Өфөләге 18-се урта мәктәптең V “Б” синыфында уҡыйым. Һүрәт төшөрөргә, йырларға, бейергә яратам. “Акварель” изостудияһына йөрөп, һүрәт төшөрөү серҙәренә өйрәнһәм, “Премьера” модель агентлығында гүзәллек буйынса дәрестәр алам. Һынлы сәнғәт буйынса кескәй генә уңыштарым да бар. Норильск ҡалаһында балалар ижады буйынса уҙған “Төньяҡ палитра” конкурсында ҡатнашып, диплом яуланым. Багира исемле бесәйем дә бар, мин уны бик яратам.





**Әлфинур Усманова, Учалы районының Науруҙ ауылынан:** “Аманат” журналын һәр саҡ көтөп алам, унда сыҡҡан бөтөн яҙмалар ҙа оҡшай. Буш ваҡытымды файҙалы үткәрергә тырышам: китап уҡыйым, ҡул эштәре менән булышам”.



**Лилиә Ишбирҙина, Салауат районының Свобода ауылынан:** “Бөтә фәндәрҙән дә яҡшы билдәләргә өлгәшәм. Математика, рус теле һәм тарих дәрестәрен яратып өйрәнәм. Киләсәктә прокурор булырға теләйем”.



**Гөлдәр Дәүләтбаева, Белорет ҡалаһынан:** “Мәктәптә үткән төрлө сара, конкурстарҙа ихлас ҡатнашам, йыр-бейеүгә лә битараф түгелмен. Ҙур үҫкәс, хореограф һөнәрен һайларға хыяллан нам”.



**Наҙгөл Батыршина, Әбйәлил районының Әбдрәш ауылынан:** “Бәйләү, сәйлән (бисер) менән мауығам, түңәрәктәргә йөрөйөм. Мәктәптә үткән “Мисс-Дюймовочка” конкурсында гран-при яуланым. Хыялым – табип булыу”.

29 АПРЕЛЬ – ХАЛЫҠ-АРА БЕЙЕҮ КӨНӨ

# "АЛТЫН МАЙҘАН"ДАН ЕҢЕҮ МЕНӘН



Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәфис Иҙрисов яңыраҡ Ҡабарҙа-Балҡар Республикаһында үткән Этник сәнғәт буйынса II халыҡ-ара "Алтын Майҙан" фестиваль-конкурсында беренсе урын яуланы. Был мәртәбәле бәйгелә Рәсәй, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән 300-гә яҡын кеше ҡатнашты. Фестиваль барышында шулай уҡ вокал, хореография һәм фольклор белгестәре ҡатнашлығында оҫталыҡ дәрестәре лә ойошторолдо.

Конкурсанттарҙың сығышы данлы Эльбрус итәгендә үтә. Еңеүгә яҡшы әҙерлек менән килгән бик күп көслө бейеүселәр дәғүә итә. Әммә беҙҙең Рәфискә етеүсе булмай, "Рекрут" бейеүе менән тамашасыларҙы ла, жюри ағзаларын да таң ҡалдыра ул. Ә инде "Еҙ үксә"не башҡарғанда бер туҡтауһыҙ "Афарин, Рәфис!" тип яңғыраған тауыштар, дәррәү алҡыштарҙан һуң беренселекте башҡорт егете аласағына бер ниндәй ҙә шик ҡалмай.



Әйткәндәй, Рәфис былтыр балалар араһында Башҡортостан Республикаһы Президенты призына уҙғарылған "Байыҡ-2009" башҡорт бейеүҙәре конкурсында ла гран-при яулағайны.

Беҙҙең бейеүсенең шундай сағыу сығышын күреп, унан хатта Тау спорты буйынса Рәсәй чемпионатында ҡатнашыусылар алдында ла бейеүен үтенәләр.

Хәҙер иһә Рәфис Төркиәлә үтәсәк фестивалдә ҡатнашырға әҙерләнә. Шул уҡ ваҡытта уҡыуына ла етди иғтибар бүлергә тырыша.

Әлеге ваҡытта IX "Е" синыфында белем ала. Химия дәресен айырыуса мауығып өйрәнә. Гимназияла икенсе йыл ғына уҡыуына ҡарамаҫтан, быйылдағы мөхит, синыфташтарына тиҙ өйрәнгән. Баймаҡ ҡалаһының 1-се урта мәктәбендә уҡығанда уҡ ҡурай, йыр буйынса республика, төбәк-ара конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урын яулай. Мәҫәлән, "Башҡортостан йондоҙсоҡтары", "Яҙғы тамсылар" кеүек республика бәйгеләрендә беренсе урынға лайыҡ була.

Бейеү менән 6-сы синыфтан шөғөлләнә. Район мәҙәниәт йортона йөрөп, танылған бейеүсе, "Ирәндек" халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе Динислам Исҡужиндан бейеү серҙәренә төшенә. "Бала саҡтан бейеүселәргә һоҡландым. Сәхнәлә сығыштарын күргән һайын, их, шулай бейеһәң ине ул, тип, гел генә хыяллана торғайным", – тине Рәфис.

– Бейеү түңәрәгендә Рәфис иң һәләтлеләрҙән һанала. Эшһөйәр, тырыш, үҙ-үҙенә талапсан егет. Хәрәкәттәрҙе күрһәтеү менән шунда уҡ отоп ала. Башҡаларҙан айырмалы ижади ҡараш та һиҙелә. Бейегәндә үҙенән дә элементтар өҫтәп ебәрә. Ә был бейеүсе өсөн мөһим сифаттарҙың береһе. "Һунарсы", "Алдар батыр" һәм "Еҙ үксә" кеүек бейеүҙәрҙе яратып башҡара, – ти Әнүәр Хәким улы.

"Моғайын, киләсәктә сәнғәт юлынан китергә уйлайһыңдыр?" – тигән һорауға Рәфис: "Әлегә кем булырымды аныҡ хәл итмәнем. Тик шуныһын асыҡ әйтә алам: бейеүҙе ташларға йыйынмайым", – тип яуапланы.

Рәфисте киләсәктә яңы еңеүҙәр, йондоҙло сәғәттәр көтөп торһон!

**Нурия ӘХТӘМОВА.**

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ: Рәфис Иҙрисов бейеү буйынса уҡытыусыһы Әнүәр Шафиҡов менән; Ҡабарҙа-Балҡар Республикаһынан еңеү менән ҡайтҡас.**




# БЕРЕНСЕ МӨХӘББӘТ

Былтырғы апрель айын, теләһәм дә, мәңге онотмамын. Уның менән осраштырғаны өсөн яҙмышыма мең-мең рәхмәтлемен. Айнур – минең беренсе мөхәббәтем... Әйткәндәй, беҙ заманса таныштыҡ...

Мәктәптән ҡайтҡас, ни өсөндөр, интернетҡа, “В контакте” сайтына, ингем килде. Ҡараһам, матур ғына бер егет дуҫлыҡ тәҡдим итә.



Риза булдым. “Аськамды” һораны. Аралаша башланыҡ. Бер нисә көндән телефон номерымды ла алды. Айнур менән һөйләшкән саҡта эргәһендә ултырғандай хис итәм үҙемде. Бар донъямды онотам. Уның яғымлы тауышын ишетеү менән кәйефем күтәрелә. Шылтыратып: ”һаумы, бәпесем! Хәлдәрең нисек, мин һине һағындым”, – тиһә, йөрәгем дөп-дөп тибеп, бәхет диңгеҙендә йөҙә башлайым... Арабыҙҙа бер генә ҡыйынлыҡ бар. Ул да булһа – ара... Мин ҡалала йәшәһәм, ул – ауыл егете. Уның районында туғандарыбыҙ ҙа йәшәй, тимәк, осрашыу мөмкинлеге лә бар.

Осрашыу өмөтө менән йәшәп ятҡанда, күп тә үтмәй, Ишембайҙан инәйем тыуған көнөнә саҡырҙы. Ур-ра! Был хәбәрҙе ишеткәс, Айнур ҙа ныҡ шатланды. Ул көн килеп тә етте. Юл буйы Айнурҙы уйлап барҙым. Байрам табынында аҙ ғына ултырҙым да, тиҙерәк тышҡа, Айнур эргәһенә, йүгерҙем. Башта бер-беребеҙгә оҙаҡ ҡына ҡарашып торҙоҡ. Шунан ул машинаһының ишеген асып, эскә ултырырға тәҡдим итте. Ишембайҙы күрһәтеп йөрөттө. Дүрт сәғәт һиҙелмәйенсә үтеп тә китте. Беренсе тапҡыр ғына күрешһәк тә, күп нәмәгә ҡараштарыбыҙ тап килеүен аңланым. Айнур менән яҡшылап хушлашып та булманы, әсәйемдәр мине юғалтып, борсола торғандыр, тип ҡабаландым. Ошонан һуң да беҙҙең аралашыуҙар туҡтаманы, көн һайын шылтыратышып, яҙышып торҙоҡ.

Тиҙҙән мәктәптә сығарылыш кисәһе. Тантанаға кейер өсөн килешле күлдәк эҙләйем. Күңелгә оҡшағаны һаман да осрамай. Аптырағас, Айнур уҡыған ҡалаға барырға булдым. Бәлки, күлдәкте унда табырмын, ә иң мөһиме, һөйгәнемде күрәсәкмен. Айнур шатланып ярҙам итергә теләүен белдерҙе.

...Бер нисә магазинда булдыҡ, тик оҡшаған күлдәк күҙгә салынманы. Шунан туй салонына индек. Таптым, ябай ғына итеп тегелгән күк төҫтәге күлдәк миңә яҙған икән. Шундай килешә, Айнур ҙа һоҡланып бөтә алманы. Туй салоны булғас, шаяртып та алды. Күлдәкте һатып алыу менән тура вокзалға елдерҙек. Хушлашыу ваҡыты еткәс, Айнур үпте... Беренсе тапҡыр... Ошо минуттарҙа минән дә бәхетлерәк кеше булмағандыр... Эргәһенән киткем дә килмәй.

Беренсе мөхәббәт... Ҡайһылай ул серле лә, ҡабатланмаҫ та...

**Гөлиә КӨҪӘПҠОЛОВА,**
**БДУ студентҡаһы.**

## НИҢӘ УРЛАНЫҢ?

Айым минең, яҡты Айым,
һине бүтән яратмайым...
Ғәфү итсе, зинһар, кисер,
Артығын мин һорамайым.
Көмөш нурың, серле сыңың,
Шундай матур һинең асылың.
Тик ниңәлер һөйөүемдә
Өлгөрмәне сәскә асылып.
һулыны ул бөрө килеш,
Етмәгәндер, бәлки, нурҙарың...
Әйтсе, яҙмыш, хыялымды
Ниңә генә, ниңә урланың?

**ҺЫУҺЫЛЫУ.**



Am@net



# Ҡап, балыҡ, ҡармаҡҡа...

## Һаҡ булығыҙ, интернет алдаҡсылары!!!

Спам – һеҙҙең рөхсәтһеҙ электрон почтағыҙға инеп ятҡан хат йәки реклама. Уларҙы урамдарҙа һеҙҙең ҡулығыҙға тоттороп киткән ҡағыҙҙар, ишек алдындағы почта йәшниктәренә тултырылған бушлай гәзиттәр менән сағыштырырға мөмкин. Әммә спам аша һеҙ фишинг тигән төшөнсә менән дә танышасаҡһығыҙ. Был иһә тура мәғәнәһендә ҡармаҡ һалыу тигәнде аңлата. Ҡармаҡ, әлбиттә, һеҙгә һалына. Ул һеҙҙең турала мәғлүмәт алыу, йә иһә һеҙҙе берәй алдаҡҡа йәлеп итеп, аҡса һығыу маҡсатында эшләнә.

Һеҙгә электрон хат аша килгән программаны алырға тәҡдим итәләр. Уны алыр өсөн һеҙ логинығыҙҙы һәм паролегеҙҙе индерәсәкһегеҙ. Шулай итеп, уларҙы сит кешегә үҙегеҙ бүләк итәсәкһегеҙ. Шундай уҡ юл менән һеҙҙе лотереяла ҙур сумма отоуығыҙ менән ҡотлауҙары ла ихтимал. Отошто, әлбиттә, һеҙҙең кредит кассаһына күсерәктәр. Ә бының өсөн карта номерҙарын ебәрергә кәрәк...

Төрлө форумдарҙа һәм ҡунаҡ биттәрендә нисек итеп тиҙ арала аҡса эшләү тураһында тәҡдимдәр гел була. Улар, ғәҙәттә, халыҡта электән киң таралған “пирамида” системаһы буйынса эшләй: һин бер нисә кешегә аҡса ебәрәһең дә, йәнәһе, аҙаҡтан шундай уҡ башҡалар ебәргән аҡса һиңә лә килә башлай... Бындай ысулдар, әлбиттә, пирамидалар тураһында гел ишетеп тә, һаман да бер ҡатлы булып ҡалған наяндарға иҫәпләнгән.

Тәҡдимдәр араһында үтә ябайҙары, мәҫәлән, тест үтеү кеүектәре лә булыуы ихтимал. Ләкин уның ҡайһылыр бер ерендә барыбер һеҙҙән йә аҡса күсереүегеҙҙе, йә теркәлеүегеҙҙе һорайҙар икән, бында ла шикләнеп ҡарарға кәрәк. Шулай уҡ интернет аша һеҙгә берәй программаны һатып алыу, йә иһә сайтҡа инеү өсөн логин-паролде һатып алыу тәҡдиме менән сығыуҙары ла ихтимал. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: алдан түләгән осраҡта ла үҙен ихтирам иткән кеше йә тауарҙы яҡшы таный, йә уны һатыусыны яҡшы беләә!

Интернет селтәре буйлап бик ҡаты сирле кешегә ярҙам һорап яҙған хаттар ҙа йөрөй. Ысындарын аҡса бурҙарынан айырыр өсөн күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙе тикшереп ҡарау етә: унда йә бәйләнеш өсөн телефон, йә банк реквизиттары һәм адрестары була.

Интернетта ултырғанда ҡапыл, компьютерығыҙҙың экранын ҡаплап, ҙур иғлан килеп сығыуы ла бар. Уны бер нисек тә һүндереп булмаһа, тимәк, иғлан вирус булып ингән. Башта икенсе компьютерҙан антивирус сайтына мөрәжәғәт итеп ҡарарға кәрәк. Унан компьютерҙы шнурынан һүндереп, яңынан “Хәүефһеҙ режим”да тоҡандырып, вирусҡа тикшерегеҙ. Шундай уҡ осраҡты башынан үткәргән берәй дуҫығыҙҙан кәңәш тә һорай алаһығыҙ.

Алдаҡсылар ҡулына нисек эләкмәү юлдары барыһына ла мәғлүм һымаҡ – бушлай сыр ҡапҡанда ғына була! Әммә уғрылар үтә бер ҡатлы кешеләргә яңынан-яңы һемәйткестәр тәҡдим итеп кенә тора һәм еңел аҡса эшләргә ымһыныусылар был ҡармаҡҡа эләгә.

**Заһит ӘБИЛЕВ.**



**P.S. Бында ошоға бәйле көләмәсте иҫкә төшөрөү урынлы булыр.**

Өйрәнсек хакер интернет форумында былай тип үтенә:
Зинһар, интернет ярҙамында аҡса эшләргә өйрәтегеҙ.
– Миңә 20 мең һум ебәр, өйрәтәм, – тип яуап биргән атаҡлы хакер.
– Ебәрҙем, өйрәтегеҙ, – тип яҙған өйрәнсек.
– Бына, ҡустым, ошолай аҡса эшләйҙәр инде ул! – булған яуап.

# ИЛ ИЖАДЫ – АҪЫЛТАШ



Был ижади өмәне беҙ февраль һанында иғлан иткәйнек. Ижад эше яңғыҙлыҡты ярата, тигән әйтем бар, әлбиттә, ләкин беҙ күмәк көс менән ижад ителгән тамашалар, ҡыҙыҡлы нәмәләр, уйлап табылған үҙенсәлекле әйберҙәр менән дә танышбыҙ. Һәр хәлдә, был эштә ҡатнашыу үҙе үк кеше өсөн мауыҡтырғыс шөғөлгә әйләнә. Әленән-әле теге йә был баҫмала ҡыҙыҡ һүрәткә тапҡыр яуап табыу, бер һүрәткә ҡарап хикәйә төҙөү кеүек конкурстар сығып тороуы ла быны иҫбатлай. Ә тотош халыҡ быуаттар буйы барлыҡҡа килтергән ижад өлгөләре нисәй?! Ошоно күҙ уңында тотоп, "Аманат" уҙ уҡыусыларына (бала һәм оло булыуына ҡарамай) шундай уҡ уйын тәҡдим итергә булды. Шарттары былай.



Бирелгән тәүге һөйләмде ҡулланып, һеҙ уның артабан дауам иткән сюжетын (буласаҡ ваҡиғалар теҙмәһен) уйлап сығарырға тейешһегеҙ. Тотош хикәйә яҙып ултырмаһағыҙ ҙа була, сөнки ул артабан һеҙ уйлағандан бөтөнләй икенсе яҡҡа сығып китеүе бар. Һеҙҙән алынған вариант буйынса яҙылған өлөшөн уҡығас, һеҙ артабанғы ваҡиғаларҙы күҙалларға һәм тағы беҙгә ебәрергә тейеш булаһығыҙ. Ана шулай дауам итеп, йыл аҙағына беҙ күмәкләп, бәлки, ҙур һәм ҡыҙыҡлы бер китап яҙып ташларбыҙ?

**Талаптар ябай:**

**– ҡыҫҡалыҡ – һәләт билдәһе;**

**– быға тиклем донъя күргән әҫәрҙәрҙәге сюжеттарҙы ҡабатлау тәбрикләнмәй;**

**– ни тиклем юғарыға ынтылһаң да, ер тормошонан айырылма;**

**– башланған эш – бөткән эш.**

Ижади өмәбеҙ йыл аҙағына тиклем барасаҡ. Әлегә исеме лә булмаған сәйәхәтнамәбеҙҙең башы ошолай булды.

Йәмле йәйҙең ихлас бер таңында Айнур, Гөлнур һәм Илнур тәғәйен генә маҡсат менән йыраҡ булмаған сәйәхәткә йыйынды. Хәйер, йыйына-төйнәнә башлауҙарына айҙан ашып бара инде. Хәҙер, халыҡта булған йола буйынса, өйҙә ҡалыусылар менән һаубуллашып, әсәйҙәрҙең фатихаһын алып, төйөнсөктәр өҫтөндә бер аҙ уйланып ултырып алырға ғына ҡалды. Юҡтан бар булмаған халыҡта был йола – тап ошо мәлдә кеше юлда кәрәгәсәк тағы нимәһендер онотоп барыуы хаҡында иҫкә төшөрөүсән. Ә сығып киткәс уның артынан кире әйләнеп ҡайтыуҙың иһә, үҙегеҙ беләһегеҙ, нисек юралғанын.

Башҡорттар борондан күсмә тормош менән йәшәгән, илгиҙәрлек – уларҙың тәбиғи сифаты! – тип инде нисәнсе тапҡыр үҙҙәренең был ниәттәренең тиктомалдандан бар булмағанлығын, ә һәр яҡтан уйланылған һәм нигеҙләнгән "саракүрәтие" икәнен әсәһенә дәлилләргә кереште Айнур.

Алдынғы илдәрҙә саҡ ҡына мөмкинлеге булған кеше лә донъя гиҙеп сыға ла китә ул. Хатта тотош дәүләттәр тик туристар иҫәбенә генә көн күреп ята, – тип уны ҡеүәтләгән булды Илнур.

Ә беҙ бына бынауында – Ҡараташҡа ғына барып ҡайтабыҙ. Уҙ төйәген дә йүнләп белмәйенсә, сит илдәр тип сабыусыларҙы йәнем һөймәй... – Атаһының да, әсәһенең дә уларҙың урманға ҡуна барыуҙарына бер һүҙе юҡлығын белһә лә, унда килеп сығыуы ихтимал һәр ваҡлыҡты төрлө яҡлап барлай–барлай, ҡат–ҡат уҡыған өгөт–нәсихәттәренән ялҡып бөткән Гөлнур ҙа уйлағандарының ап–анһат ҡына икәнен тағы бер иҫкә төшөрөүҙе кәрәк тип тапты.

Бесәнгә йөрөгәндә урмандағы ҡыуышта йоҡлап өйрәнгәнһегеҙ, бындай йылыла һеҙгә бер ниҙә булмаҫ, – тип ҡушылды Айнурҙың атаһы Искәндәр ағай. – Телефонығыҙҙың батареяһы бер–ике көнгә етер, моғайын, һалып алығыҙ.

– Һе, батарея булыуы менәнме ни, элемтә юҡ бит ул тирәлә! – Гөлнурҙың өләсәһе лә замана техникаһының эшмәкәрлеге менән бер аҙ таныш булыуын күрһәтеп алды. – Юл кешеһенең юлда булыуы хәйерле, балалар, әйҙәгеҙ, изге сәғәттә юлланығыҙ.

Алға, дуҫтар! Беҙҙе бөйөк эштәр көтә! – тип ҡайҙандыр уҡыған яңғырау һүҙҙәрҙе ҡабатланы ла, Айнур үҙенән дә ҙурыраҡ күренгән туристар биштәрен арҡаһына артмаҡланы.




«Шәп малай» конкурсының февраль айының еңеүселәре тип дөрөҫ яуаптарҙы беренсе булып ебәргән **Кушнаренко районының Кушнаренко ауылынан Рөстәм Рамаҙановты** һәм **Салауат районының Малаяҙ ауылынан Илүзә Мырҙағолованы** иғлан итәбеҙ. Афарин!

**Дөрөҫ яуаптар (№02-2010)**

1. Коста-Рика
2. Фиджи
3. Греция
4. Венгрия
5. Һиндостан
6. Намибия
7. Люксембург
8. Руанда
9. Тайвань
10. Того

Ә был флагтарҙың ҡайһы илдәрҙеке икәнен, йә, кем беренсе белер һәм хәбәр итеп өлгөрөр – шул еңеүсе!

Һеҙҙән хаттар һәм телефон аша хәбәрҙәр көтәбеҙ!

СМС-хәбәр ебәрер өсөн кеҫә телефонынан 3443 номерын һәм «Малай» префиксын йыйырға кәрәк.




Префикс: “Малай”

# ИКЕ АЯҠЛЫ ҮРМӘКСЕЛӘР









Паркур (француз һүҙе parkour, parcours, parcours du combattant һүҙҙәренән үҙгәртеп алынған) аралыҡ, тотҡарлыҡлы юл тигәнде аңлата. Паркур — ҙур тиҙлектә хәрәкәт итеү һәм тотҡарлыҡлы юлдарҙы үтеү сәнғәте. Ҡайһы бер шөғөлләнеүселәр өсөн ул хатта ғәҙәткә әүерелеп китә.

Был ғәжәйеп хәрәкәт итеү ысулына бер төркөм француз егеттәре нигеҙ һалған (Давид Белль, Себастьян Фукан һ.б). Хәҙерге ваҡытта бөтә донъяға киң таралған был спорт төрө менән бөтөн ҡалаларҙа ла әүҙем шөғөлләнәләр.

Паркурҙың асылы ҙур тиҙлектә төрлө ҡаршылыҡтарҙы ҡорамалдарһыҙ еңел рәүештә үтеү, мәҫәлән, бейек ҡоймалар аша үтеү, биналарға үрмәләү йәки ҡыйыҡ баштарынан бер ниндәй ҡорамалдарһыҙ йөрөүҙән ғибәрәт. Паркур менән шөғөлләнеүсе кешене трейсер (француз һүҙе tracer – “шәп атлау”) тип атайҙар.






ДАВИД БЕЛЛЬ




## Паркур тарихынан

1875 – 1957 йылдарҙа йәшәгән. Жорж Герберт Францияның хәрби-диңгеҙ флотында хеҙмәт иткән сағында, Африкаға экспедиция ваҡытында аборигендарҙың һунар иткән мәлдә нисек итеп хәрәкәт итеүҙәрен отоп алып, үҙенең һалдаттары өсөн “Натураль ысул” тигән яңы үҙенсәлекле ҡағиҙәләр һәм күнегеүҙәр уйлап сығарған.

Раймонд Белль армияла хеҙмәт иткән сағында «Натураль ысулды” отоп ала. Хеҙмәт итеп ҡайтҡас, ут һүндереү командаһында эшләй башлай һәм янғын һүндергәндә белемен бик әүҙем ҡуллана һәм популяр булып китә.

Раймонд Беллдең улы – Давид иһә, атаһы юлынан киткән, гимнастика, еңел атлетика, хәрби дисциплиналар менән шөғөлләнә.

Паркур Рәсәйҙә Мәскәү командаһы “Tracers” менән танылыҡ яулай. Нигеҙ һалыусыһы – Олег Краснянский.

Трейсер булып китеү өсөн бик күп физик күнегеүҙәр кәрәк. Хәҙерге ваҡытта трейсерҙарҙың күбеһе янғын һүндереү командаһында хеҙмәт итә. Ә айырым командалар иһә, бәләгә тарыған кешеләргә ярҙам итергә әҙер тора.



















# Борай районы



Борай районы Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында урынлашҡан. Борай – бойҙайҙың бер төрө. Районда күпселектә ауыл хужалығы үҫешкән. 95 ауылда 30 мең кеше йәшәй. Район үҙәге – Борай ауылы.



Гербтың төп өлөшөн-йәшкелт фонда сабып барыусы Күк бүре – төрки халыҡтарының уртаҡ символы алып тора. Был яҡтарҙың аҫаба халҡы булған Йәлдәк, Йылан, Танып, Таҙлар һәм Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының ырыу тамғалары түңәрәк композиция – мәңгелек хәрәкәт билдәһен хасил итә. Алтын төҫ байлыҡ һәм муллыҡ билгеһе гербта йәшел-күк – күк менән ерҙең уртаҡлығын сағылдырыусы төҫ фонына ята.

Райондың флагында гербтың элементары сағылдырыла.

2006 йылда ҡабул ителгән.









# “ӘЙ ХӘҘЕР – ИРТӘГӘ БУЛАСАҠ ҺАУА ТОРОШО ТУРАҺЫНДА”

Метеорология – грек телендә һауа күренештәре тураһында фән тигәнде аңлата. Уны ҡайһы саҡта атмосфера физикаһы тип тә атайҙар һәм был исем уның тура мәғәнәһенә тап килә. Был фән бик күп тармаҡтарҙан тора. Әммә күпселектә метеорологтарҙың эшен беҙ алдағы көндәргә һауа торошон билдәләүгә ҡалдырабыҙ. Был өлкәлә лә уларҙың эштәре төрлө, мәҫәлән, метеорологтар ауыл хужалығы өсөн, диңгеҙ флоты өсөн, самолеттар өсөн, тәҙәүселәр өсөн, хәрбиҙәр өсөн айырым прогноздар эшләйҙәр. Беҙҙең өсөн көнөнә әллә нисә тапҡыр һауа шарттары тураһында мәғлүмәт биреп тороу – улар эшенең кескәй генә бер өлөшө. Америкала, мәҫәлән, һауа торошон төрлө каналдар аша ун биш минут һайын яңыртып торалар.

Беҙҙә, ғәҙәттә, һауа торошо бер тәүлеккә эшләнә. Шуға ла һауала йыш булып торған кiсҡен үҙгәрештәр бында иҫәпкә алынмай һәм, әгәр иртән көндөң аяҙ буласағын хәбәр итеп, кискә ямғырға эләкһәгеҙ, бында метеорологтарҙың ғәйебе юҡ. Ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә улар бер-ике сәғәттән ҡойон буласағын да күҙаллап, алдан иҫкәртергә өлгөрә ала, тик әлеге лә баяғы, тәүлегенә бер тапҡыр прогноз биреү системаһы һаман һаҡлана килә. Шуның өсөн телевизорҙа бөгөн көндөҙ ҙә “һауа торошо”нда кисә кис алынған температура күрһәткестәре торасаҡ.




Рәсәйҙә һауа торошон күҙәтеү Петр I батша заманында башлана. 1715 йылда Нева йылғаһының ташыуын ҡарап тороу өсөн беренсе һыу үлсәгес пост булдырыла. Ә 1724 йылдан термометр һәм барометр ҡулланып һауа торошон билдәләүсе метеостанция эшләй башлай. Бик оҙаҡ йылдар метеопостар йылғаларҙың кимәлен билдәләү өсөн генә ҡулланыла, сөнки һауа торошон күҙаллау һәм, иң мөһиме, уны ваҡытында халыҡҡа еткереү өсөн шарттар булмай. Борон замандарҙа күпселек бәләләр ҙә ташҡын һыуҙар менән килә, ә крәҫтиәндәр ер эштәрендә тик үҙ күҙаллауҙарына ғына таянып эш итә. Советтар Союзында Үҙәк һауа торошо бюроһы 1930 йылда асыла.



Егерменсе быуат аҙағына кешелек һауа торошон ҡыҫҡа һәм уртаса ваҡытҡа күҙаллау буйынса ярайһы уҡ ҡаҙаныштарға ирешә алды. Фәндең, техниканың, технологияларҙың ныҡ алға китеүе арҡаһында, хәҙер бик ҙур майҙандарҙа тотош миҙгелдәрҙең нисегерәк булырын, аҙна-ун көнгә яуым-төшөмдәрҙе, температура режимдарын юғары теүәллек менән билдәләргә мөмкин. 130 йыл элек барлыҡҡа килгән Бөтөн донъя метеорологик ойошмаһы аша хәҙер тотош ер шарындағы метеостанциялар бер-береһе менән мәғлүмәт алышып, глобаль үҙгәрештәрҙе лә фаразлай ала.

Төрлө яҡтан йыйылған бихисап мәғлүмәттәрҙе эшкәртеп, метеоүҙәктәр 5 – 7 тәүлеккә теүәл прогноз бирә. Ә бына яҡын тирәләге, айырым урындағы кiсҡен үҙгәрештәрҙе улар билдәләй алмай. 100 саҡырым арауыҡтағы ҡыҫҡа ваҡытлы үҙгәрештәрҙе әле лә электрон техника түгел, ә урындағы синоптиктар фаразлай. Шуға ла көслө дауыл, өйөрмә, ҡойма ямғыр һәм йәшендәр кеүек ҡыҫҡа ваҡытлы атмосфера күренештәрен тик бер тәүлек, хатта бер нисә сәғәт арауығында ғына асыҡларға мөмкин.









# Башватҡыс

## “АМАНАТ” УҠЫУСЫЛАРЫНАН БАШВАТҠЫСТАР



### “Урал батыр”

1.Мөхәмәтша Буранғолов “Урал батыр” эпосын кемдән яҙып алған? 2. Ҡаһҡаһәнең улы. 3. “Урал батыр” – башҡорт халҡының донъя күләмендәге әһәмиәткә эйә булған бөйөк рухи ... 4. Эпостағы мифик толпар. 5. Уралдың ағаһы. 6. Ҡобайырҙа тотем һаналған ҡош. 7. Ҡояш ҡыҙы. 8. “Урал батыр” эпосын төрөк теленә тәржемә иткән ғалимдың исеме. 9. “Урал батыр” әҫәре мифик мотивтары буйынса ниндәй жанрға ҡарай? 10. Урал менән Шүлгәндең атаһы. 11. Ҡоштар иле батшаһы. 12. Урал сығып баҫҡан, ти, ошо һүҙен әйткән, ти: мин күренмәҫ (...) юҡ итергә сыҡҡанмын. 13. “Урал батыр” эпосы тәржемә ителгән телдәрҙең береһе.

**Өфө ҡалаһының 48-се Башҡорт лицейы уҡыусыһы**
**Артур Ҡарағолов төҙөнө.**

### Был йомаҡтарҙы сисһәгеҙ, үҙегеҙгә яҡын бер һүҙҙе уҡырһығыҙ.



1.Аҡ кейемен кейгән, йәшел суғын элгән. 2. Йөрөтөүе еңел, ә һанауы ауыр. 3. Аяҡ-ҡулһыҙ бисура, түр башында, карауатта ҡуҡырайып ултыра. 4. Бәләкәй генә малай, ағас төбөн ялай. 5. Көндөҙ өнһөҙ, ухылдамай төнһөҙ. 6. Бәләкәй генә бер көсөк, өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә. 7. Ҡат-ҡат туны, ҡарыш буйлы. 8. Осо нәҙек, төбө йыуан, ярата уны ҡуян.

### Ә был кроссвордта Башҡортостандағы район исемдәре яҙылған



**Асҡын районының Ҡарткиҫәк мәктәбе уҡыусыһы**
**Айгөл Мөхәмәтнурова төҙөнө.**

### Яуаптар

**“Урал батыр”:** Ғәбит, Зәркум, комартҡы, аҡбуҙат, Шүлгән, коҙғон, һомай, Ғәйнисылам, эпос, Йәнбирҙе, Самрау, әжел, инглиз.

**Асҡыс һүҙ:** Буранғол сәсән.

**Мәкәлдәр:** кайын, сәстәр, мендәр, балта, өкө, йоҙаҡ, кәбеҫтә, кишер.

**Райондар:** Яуаптар: Асҡын, Баймаҡ, Учалы, Балакатай,

# Көләмәстәр

**Турагентлыкка звонок:**

**– Һеҙ Египетка путевка һатаһығыҙмы?**

**– Һатабыҙ.**

**– Унда ниндәй ял йорттарын тәкдим итер инегеҙ?**

**– Хургада, Шарм–әш–Шәйех, Таба, Нувейба…**

**– Рәхмәт, бына, Нувейба беҙгә бара!**

**– Һеҙ унда ҡасаныраҡ барырға йыйынаһығыҙ?**

**– Бармайбыҙ, беҙ бында кроссворд сисәбеҙ…**

* * *

Һорау үҙе тәкдимде тыуҙыра, тиеүҙәре ялған! Илебеҙҙә бушлай интернетҡа шундай ҙур мохтажлыҡ, ә ул барыбер юҡ…

* * *

**Бабай – малайға:**

**– Һин велосипедта йөрөй беләһеңме?**

**– Юҡ.**

**– Улайһа, минең велосипедты ҡарап тор әле, мин кибеткә кереп сығам…**

* * *

Телефондан һөйләшеү:

– Һеҙҙә унда көн торошо ниндәй?

– Белмәйем, минең интернет эшләмәй.

* * *

**– Самат, тиҙ генә әйт: һигеҙ бишең нисә була?**

**– Ҡырҡ биш, Әнисә апай.**

**– Дөрөҫ түгел. Ултыр, “икеле”!**

**– Һуң һеҙ, апай, тиҙ генә әйтергә ҡуштығыҙ ҙаһа, ә дөрөҫөн түгел…**

* * *

– Кисә юлдан бер даға табып алдым! Беләһеңме, был нимәне аңлата?

– Беләм: ҡайҙалыр бер ат дағаһыҙ тәпәйләй.

* * *

**Ике әхирәт талаша:**

**– Нишләп һин барыһына ла мине исәр тип әйтеп бөткәнһең?!**

**– Ғәфү ит, мин һинең быны йәшереп йөрөгәнеңде белмәнем бит…**

**Тышлыктың беренсе битендә: Рәми Ғарипов исемендәге I Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Рәфис Иҙрисов.**


**АМАНАТ** ©

**Республика балалар-үсмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 04 (797), Апрель, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәррирләт:

Артур СУРИН, Салауат СӘҒИТОВ, Артур ИҘЕЛБАЕВ, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапкыр башкорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаклау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныклык ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612



БЕҘҘЕҢ АДРЕС:

450001, Башкортостан Республикаһы, Өфө калаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.

450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:

баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 223-91-83;
бүлектәр – 277-74-80.
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru



РЕКВИЗИТТАР:

г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала “АМАНАТ”
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО “УралСиб”,
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башкортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.

Адресы: 450001, Башкортостан Республикаһы, Өфө калаһы, Октябрь проспекты, 2.

Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».

Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.

Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.04.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108 $^{1}/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 16969. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0042.10

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

# Фотоға төштөк әле...



Йогаларҙан да уҙҙыра
Беҙҙең медитация!
Беҙҙе күргән һәр бер кеше:
“Байназарҙар – шәп!” – тиә.

**Айсинә Йосопова.**
**Бөрйән районының**
**Байназар ауылы.**



Күрегеҙ: мин бик кескенә,
Ә әсәйгә булышам.
Билмәндәр эшләп бөтәм дә,
Һауыт-һаба йыуышам...

**Лилиә Үтәшева.**
**Благовар районының**
**Үрге Ҡарғалы ауылы.**



Йылғаға барып та тормай,
Тотам бешкән балыҡты.
Хәҙер тартып сығарырмын
Туп-тумалаҡ карпты.

**Динар Тимершәйехов.**
**Илеш районының**
**Ишҡар ауылы.**



Пистолеты үҙенән дә
Ҙурыраҡ, тип уйлаһаң,
Ҡоралды, тимәк, белмәйһең.
Был бит уйынсыҡ наган!

**Вилдан Утарбаев,**
**Баймаҡ районының**
**Иҫке Сибай ауылы.**



Алпамыша яһай һинән
заман аппараттары:
Быйна, Наҙгөл дә һеңлеһен
Күтәреп кенә тора!

**Альмира ӘЙЮПОВА.**
**Ейәнсура районының**
**Иҫәнғол ауылы.**



Ҡарҙар иреп бөттө күптән,
Сыйырсыҡтар ҙа ҡайтты.
Сыңғыҙ ҡустым менән беҙгә
Яҙ оялар яһатты.

**Илнур һәм Даян Ғүмәровтар.**
**Баймаҡ районының**
**Өмөтбай ауылы.**

Ҡар аҫтынан шытып сығып,
Яҙ сәләмен алып килгән
Мин — зәңгәр умырзая.
Миҙгелем ҡыҫҡа булһа ла,
Көндәрем уҙмаҫ зая,
Гонаһһыҙ сабый шикелле,
Ҡояшҡа йылмайып баҡҡан
Мин — көләс умырзая.

Сыуаҡҡа үрелеп үҫкән,
Яҙҙың иң тәүге сәскәһе
Мин — наҙлы умырзая.
Үҙем нескә генә сәскә,
Әммә йөрәгем сая,
Һалҡын боҙ ҡатламын тишеп,
Сал Уралға тамыр йәйгән
Мин — нәфис умырзая.

1961.
Абдулхаҡ ИГЕБАЕВ.

Республика йылы 1990 2010 Год республики

